ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

4-10 ноябрь (ҡырпағай) 2017
№44 (774)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡайһы заман яҡшыраҡ,**
йәки Октябрь революцияһының 100 йыллығы айҡанлы уйланыуҙар



3,8

**Эш дәреслектә генәме?**



6

**Бәйгебеҙгә...**
республикабыҙға дан йырларға теләүселәр килһен!



11

**Ағас семәре мөғжизәһе**



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***
***2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тарихсылар тарафынан Октябрь революцияһына тейешле баһа бирелдеме? Ә һеҙ ниндәй баһа бирәһегеҙ?



***Азамат АҠЪЮЛОВ, БДУ-ның Тарих һәм дәүләт идараһы институты доценты:*** Илебеҙҙә 1917 йылдың октябрь айында булып үткән ваҡиғаларҙы бер яҡлы ғына баһалауы ауыр. Һикһән йылдан ашыу был инҡилапты Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы тип йөрөттөк. Бөгөнгө көндә беҙҙең ул ваҡиғаларҙы төрлөсә баһаларға хоҡуғыбыҙ бар. Кемгәлер ул Бөйөк Октябрь булып ҡала, ә кемдер уны тотош бер илде социалистик эксперимент үткәреү өсөн яһалған түңкәрелеш (переворот) тип иҫәпләй.

Тарихтан билдәле булыуынса, XX быуатҡа Рәсәй империяһы күп кенә хәл ителмәгән мәсьәләләр менән аяҡ баҫа. Беренсенән, ер мәсьәләһе. Халыҡтың күпселеген тәшкил иткән крәҫтиәндәр ерһеҙ интегә. Иң ундырышлы ерҙәр помещиктар ҡулында ҡала бирә. Икенсенән, милли мәсьәлә. Рәсәй империяһында көн күргән халыҡтар үҙ дәүләтселегенән мәхрүм була, улар милли иҙеүгә дусар ителә. Өсөнсөнән, эшселәрҙең ҡот осҡос хәле, улар бик ауыр шарттарҙа эшләй, бер ниндәй дәүләт яҡлауы менән файҙаланмай. Быларға һуғыш ауырлығы ла ҡушыла. Батша хөкүмәте лә, Ваҡытлы хөкүмәт тә был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе кисектереп килә. Ә халыҡтың ризаһыҙлығы көндән-көн арта. Шул ваҡытта большевиктар халыҡ күтәргән талаптарҙы үҙ лозунгыһына әйләндерә. Улар халыҡ менән халыҡ телендә һөйләшә: "Тыныслыҡ теләйһегеҙме, улайһа, штыктарҙы ергә ҡаҙағыҙ ҙа - өйгә, ҡоралды үҙегеҙ менән алһағыҙ, тағы ла яҡшыраҡ (кәрәге тейеүе бар)", "Ерле булырға теләйһегеҙме, уны алпауыттарҙан тартып алығыҙ" һәм башҡа шундай саҡырыуҙар ташлай. Ошондай лозунгылары менән большевиктар Петроградта, Мәскәүҙә, башҡа ҙур ҡалаларҙа һалдаттарҙың, матростарҙың һәм эшселәрҙең күпселеген үҙ яғына ауҙарыуға өлгәшә. Шулай итеп, 1917 йылдың октябрендә большевиктар власты үҙ ҡулдарына алыу өсөн уңайлы мөҙҙәтте ҡулдан ысҡындырмай. Бында В.И. Лениндың шәхесе, эшселәр араһында уның абруйы ла ҙур әһәмиәткә эйә була. Ғөмүмән, көнүҙәк мәсьәләрҙе ваҡытында хәл итмәү, уларҙы Ойоштороу Йыйылышына (Учредительное Собрание) тиклем кисектереү, диалог урынына репрессив сараларға күсеү һәм барған һуғыш властың большевиктар тарафынан яулап алыныуына сәбәпсе була ла инде. Бына ошондайыраҡ баһалауҙарҙы ла тарихсылар әле яңыраҡ ҡына телгә ала башланы бит. Октябрь революцияһы ваҡиғаһы барыбер ҙә уникаль күренеш, уны әле тикшерәсәктәр, том-том китаптар яҙасаҡтар. Ул хеҙмәттәрҙең йөкмәткеһе, әлбиттә, совет осоронда яҙылған китаптарҙан ҡырҡа айырыласаҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# ЭШСЕ ҺӨНӘРЕ ЛӘ...

**Илдәр Гиззерә**



**Эшсе һөнәрен үҙләштереүселәргә ҡытлыҡ кисерә ил: эш урыны табырға ярҙам иткән үҙәктәр килтергән мәғлүмәттәрҙе ҡарағанда һәр ерҙә төҙөүсе, йөк ташыусы, сантехник, электрик, ашнаҡсы, хеҙмәтләндереүселәр талап ителеүен күрәбеҙ. Ул эштәрҙе атҡарырға теләүселәрҙең йәш категорияһы буйынса ла ҡытлыҡ - йәштәр килмәй. Был аңлашыла ла, бөтәһе лә юғары белем алырға һәм абруйлы эш урыны табырға, көрәп аҡса эшләргә теләй. Ә бына Сибай күп профилле һөнәрселек колледжы студенты Рафаэль Яхин ошо рәүешле фекер йөрөткән бик күптәрҙең ҡарашын үҙгәртерлек йәш кеше. Күптән түгел ул WorldSkills һөнәри оҫталыҡ буйынса донъя чемпионатында "Таш эшкәртеү" буйынса өсөнсө урын яулап ҡайтты һәм эшсе һөнәре аша ла юғары уңышҡа өлгәшергә мөмкин булыуын иҫбатланы.**

Абу-Дабиҙа үткән WorldSkills Competition-2017 44-се донъя чемпионатында Рәсәй йыйылма командаһы составында "Таш эшкәртеү" йүнәлешендә һөнәри оҫталығын күрһәткән яҡташыбыҙ был еңеүенә дүрт йыл әҙерләнгән. 11-се синыфты тамамлағандан һуң Сибай күп профилле һөнәрселек колледжының "Бина һәм ҡоролмаларҙы төҙөү һәм файҙаланыу" йүнәлешенә уҡырға инеп, таш юныу менән ҡыҙыҡһынып киткән Рафаэль еңеүе тураһында башҡорт ир-егеттәренә хас тыйнаҡлыҡ менән һөйләнe.

(Дауамы 5-се биттә).

12+

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Быйыл бөтә донъяны тетрәткән Бөйөк Октябрь революцияһына 100 йыл тула. Уны хәҙер "бөйөк" тип түгел, ә "Октябрь түңкәрелеше" тип кенә йөрөтәләр. Ҡасандыр иң оло һаналған байрамды "Берҙәмлек көнө" тип үҙгәрттеләр. Нисек кенә булһа ла, Октябрь революцияһы Рәсәй халыҡтарының ғына түгел, донъялағы күп илдәр тарихында ла һынылышлы бер ваҡиға булды. Уның ыңғай һәм кире яҡтарына баһа биреү - тарихсылар, сәйәсмәндәр эше. Мин иһә, совет осоронда йәшәгән, пионер, октябрят, комсомол, коммунист булған кеше, үҙемдең шул осорҙағы ҡайһы бер хәтирәләрем, кисерештәрем менән генә уртаҡлашмаҡсымын.**

# ҠАЙҺЫ ЗАМАН ЯҠШЫРАҠ,

## йәки Октябрь революцияһының 100 йыллығы айҡанлы уйланыуҙар

### Һәр ерҙә Советтар байрағы...

Бөйөк Октябрь революцияһының 50 йыллығын үткәрергә бөтә ил әҙерләнеп йөрөгән мәлдәр хәтеремдә бик яҡшы уйылып ҡалған. Беҙ, муйындарыбыҙҙа ҡыҙыл галстук йөрөтөүсе пионерҙар, тулҡынланып, дәртләнеп, ауыл клубында концерт ҡуйырға әҙерләнәбеҙ. Уҡытыусы Фирҙәүес апай хор менән йырларға бик матур йыр ҙа өйрәтте.

Беҙҙең олатайҙар, өләсәйҙәрҙең быны шундай ҙур датаға ҡарата бер аҙ битарафлығына ғәжәпләнеп бөтә алмайбыҙ. Йөҙҙәрендә байрам сатҡылары ла һиҙелмәй. Илле йыл элек байҙарҙан изелеп йәшәгән ҡартатайҙарыбыҙ үҙҙәренең ирекҡә сығып, хөрриәт тормошҡа күсәнлектәрен баһалап еткермәгән һымаҡ. Ул ғына ла түгел, өләсәйем хатта Ленин бабайҙың бер ҡулын алға һоноп торған һүрәтенә күрһәтеп: "Мына был - яман бабай, кешеләрҙе һуғышҡа өндәй", - тип аптырата. Ул һәм ауылдағы тағы бер нисә әбей-бабай хатта иҫке тормош ҡалдығы, "халыҡтарҙың әфиүне" булған динде тотоуын дауам итә. Уларҙың намаҙ уҡып, ураҙа тотоп, дини байрамдар үткәреүенә сәйерһенеп ҡарайбыҙ. Әле 40-45 йәштәрҙә генә булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙең атай-әсәйҙәребеҙ ҙә шуларға эйәрә бит әле. Эй, наҙанлыҡ... Большевиктар "ҡанлы Николай" батшаны ҡолатып, байҙарҙы бөтөрөп, динде тыйып, илдә социалистик ҡоролош төҙөмәгән булһа, беҙ ошо матур, бәхетле тормош хаҡында хыяллана ла алмаҫ инек бит инде!.. Мин тырыша-тырыша шиғыр ятлайым:

*Ҡысып-һөйөп үпте лә*
*әсәйем бөгөн мине:*
*"Тор, йыуын, тиҙерәк кейен,*
*күҙ нурым, гөлөм, - тине,*
*Бөгөн Октябрь көнө,*
*байрам көн бөгөн, - тине,*
*Ленин беҙгә был көндә*
*ҙур бәхет бирҙе", - тине.*

Ололарҙың бер нәмә лә аңларға теләмәүенә эс боша. Ниндәйҙер бер мәжлестә, Ҡөрьән уҡырға саҡырылған мулла олатай, үҙенең янында ултырған көрәк һаҡаллы Фәхретдин бабайға ымлап: "Был Фәхретдин ағай менән беҙ бер аҙ ғына әүәлгә тормоштоң рәхәтен татып ҡалдыҡ инде. Хәҙер заманалар боҙолдо..."- тиеүен дә мин бөтөнләй аңламайым. Дөрөҫөрәге, аңлайым, әммә һис кенә лә уның менән ризалашҡым килмәй. Нисек ризалашырһың: әгәр совет власы булмаһа, беҙ бит һаман да һуҡа менән ер һөрөп, байға батраҡ булып көн күрер инек, бер кемгә лә кәрәкмәгән динде тотторop ҡаҡшатырҙар ине... Ошо өлкән кешеләрҙең бер ҡатлылығын, наҙанлығын башҡа һыйҙырып булмай. Мулла олатайҙарҙың өйөндә йыш ҡына уның ейәне менән бергә уйнай инек. Стенала эленеп торған сәғәттәрендә ҡыҙыл байраҡ, мылтыҡ тотоп, Ҡышҡы һарайҙы штурмларға барыусы эшсе, матрос һәм һалдаттың һүрәте бар ине. Әммә олатайыбыҙ уларҙың йөҙҙәрен ниндәйҙер осло нәмә менән арҡыс-торҡос сыйғылап ҡуйған. Шуға ныҡ ғәжәпләнгәйнем. "Беҙгә бәхет килтергән шул революционерҙарҙың һүрәттәрен ни хәлгә төшөргән был наҙан мулла", тип уйлайым...

Ул саҡта бала кешенең башҡаса уйлауы мөмкин дә булмағандыр. Беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ илдә булған һәр ваҡиғаны, һәр күренеште тап ана шундай итеп аңыбыҙға һеңдергән, күрәһең. Уларҙың үҙҙәренә лә юғарынан тап шундай талаптар ҡуйылған булғандыр инде. Беҙҙең ил - Ер шарында иң алдынғы, иң бай ил, тип һанайбыҙ. Тракторҙар, машиналар, комбайндар тик социализмға күсеү һәм колхозлашыу арҡаһында, "бөйөк Ленин бабайҙың фарманы" буйынса ғына барлыҡҡа килгән икән дә, беҙҙең Советтар Союзынан башҡа илдәрҙә ошо көнгәсә аслыҡ-яланғыслыҡ, ҡараңғылыҡ һәм ярлылыҡ хөкөм һөрә икән, тигән инаныуҙабыҙ. Американы ла мин тап ана шулай, йәғни унда ялланаҡлы негрҙар атҡа егелгән һуҡа артынан йөрөп яталар ҙа, игенде ураҡ менән урып, ҡул менән һуғалар икән, тип күҙ алдына килтерәм.



Большевиктарҙан Төркиәгә - капиталистик илгә ҡасҡан "Совет власы дошманы, милләтсе Зәки Вәлиди" хаҡында ла мәктәптә белдек. Йәш ҡыҙҙарҙы үҙ ихтыярынан тыш кейәүгә биреүҙе хуплаусы боронғо дин ҡанундарына ризаһыҙлыҡ белдерәбеҙ... Муллаларҙың барыһы ла ҡомһоҙ, һаран, аят уҡыуҙан, хәйер йыйыуҙан башҡа нәмәне белмәгән наҙан кешеләр, тигән уй беҙҙең аңыбыҙҙа. Шулай уҡ байҙар ҙа яуыз, ялҡау, тик уйынкөлкөнә генә белгән кешеләр, ярлыларҙы изеп йәшәргә ынтылыусылар, ә фәҡир халыҡ - иҙрат та эшсән, егәрле һәм яҡшы күңелле, тип уйлаусылар мин генә булмағанмындыр.

Беҙҙең мәктәптә алыҫ Себер ҡалаларының береһенән - Черемуханан килгән Зөһрә исемле апай уҡытыусы булып эшләй. Урыҫса ла, башҡортса ла бик матур, оҫта һөйләшкән был апайҙы йотлоғоп тыңлайбыҙ. Бөйөк Ленин тураһында сәғәттәр буйы шундай матур итеп һөйләй уҡытыусыбыҙ. Олораҡтарҙан ишетеүебеҙсә, утыҙынсы йылдар башында Зөһрә апайҙың атаһы Дауыт старшина бик бай кеше булған өсөн һөргөнгә ебәрелгән. Ул саҡта кескенә булған Зөһрә апай ҙа атаһы, әсәһе һәм башҡа туғандары менән бергә "һөрөлгән". Шуға үкенәбеҙ: ниндәй яҡшы апайҙың атаһы - "дошман" булған! "Ҡулға алынған кешеләр ауылдаштары менән бәхилләшеп, бөтә бала-сағалары менән сыр-сыу булып, илаша-илаша китә торғайнылар..." тип һөйләй ололар. Барлыҡ мал-тыуарын, өйөн, ҡаралтыларын тартып алып, ғаиләне менән тыуған яғынан ситкә ебәрелгән байҙың үҙен ни өсөндөр йәлләмәйбеҙ, ә балалары йәл булып тойола. Шул Черемуха ерендә үҫеп, уҡып, белем алып, тыуған яғына эшкә ҡайтҡан кеше ине ул Зөһрә апай. Уҡытыусыларҙы яратмағаныраҡ бәғзе малайҙар үҙ-ара һөйләшкәндә уны "ҡулаҡ балаһы", тип телгә ала ине. Бай балаһы булғас, совет кешеләре араһында йәшәргә ояла ла торғандыр инде, тип, мин уны йәлләп тә ҡуя торғайным. Ә үҙемдең указной мулла ейәне икәнемде иҫләмәҫкә тырышам. Был хаҡта атайым аша ишеткеләгән булһам да, башҡаларға өндәшмәйем. Атайым икенсе районда тыуып үҫкәнгә күр, ауылдаштарыбыҙ был хаҡта бер ни ҙә белмәй. Шулай булыуы хәйерлерәк...

Дәрестәрҙә тик патриотик йырҙар ғына өйрәтәләр. Яратып, дәртләнеп, тырышып-тырмашып уларҙы отоп алабыҙ. Батыр Вәлидтең "Күк Ирәндек буйында" тигән шиғырына яҙылған йырҙы өйрәнгәндә мин әле мәктәпкә лә бармағайным.

*...Бегун йүгерә заводта*
*пар йырлаған тауышҡа*
*Гөрләп-сайҡалып,*
*Иҫке тормош күҙ һөртә,*
*шыңшый-шыңшый йәш бөркә*
*Ситкә тайпылып...*

Быны шул куплетын йырлағанда минең дә күҙҙәремдән йәш атылып сыға. "Иҫке тормош"то бер ситтә, мөйөштә генә мышнап, кемдәндер йәберһетелеп, илап торған меҫкен бер кеше һымаҡ итеп күҙ алдына килтереп, уны ла йәлләйем.

"Ялан батыры"н йырлағанда, күршебеҙҙә йәшәгән олпат кәүҙәле Хөрмәт исемле бер фронтовик ағай күҙ алдына килә, сөнки ул йырҙа ошондай юлдар бар:

*...Хеҙмәт өсөн*
*шундай оло хөрмәт*
*Беҙҙең генә тыуған илдә ул...*

Мөхәббәт хаҡында ла йырҙар булды, әлбиттә. Әммә ниндәй генә һөйөү йырын алып ҡарама, ул Тыуған илгә тоғро, намыҫлы хеҙмәт, йәиһә комсомол һәм партияға һөйөү менән бәйле. Шундай "һөйөү" хатта егет менән ҡыҙ араһындағы мөхәббәттән күпкә өҫтөнөрәк тә ҡуйыла. Йыш ҡына, ауылда концерт ҡуйғанда, бер апай менән бер ағай "Хәмдиәкәй" тигән йырҙы сәхнәлә йәнәш тороп башҡаралар. Тәүҙәрәк егет, бер ҡулы менән үҙенең сәсен тарай-тарай, ҡыҙға ғашиҡ булыуы хаҡында йыры менән белдергәс, ҡыҙ, егеттең күҙҙәренә мөхәббәтле ҡарашын төбәп, былай тип йырлай:

*...Сәстәреңде йыш тарама,*
*Миңә бик йыш ҡарама,*
*Егеткәйем, баҫыуҙарҙа*
*Эштәрең бит - алама!*

Шул саҡ егет кинәт сәсен тараҙан туҡтала ла, етди төҫ алып, ҡыҙға былай тип йырлай:

*Улай икән, Хәмдиәкәй -*
*Көнө-төнө эшләрмен.*
*Тукта, тукта, эшләп-эшләп,*
*Яратмаһаң, нишләрмен?..*

Мин дә, бала кеше булыуыма ҡарамаҫтан, эстән генә хыялланам: "Их, үҫеп еткәс, алдынғы эшсе булған, яландарҙа эшләгәндә йөрәгә ярһып торған комсомолка ҡыҙҙы ғына кәләш итеп алыр инем..."

**(Дауамы 8-се биттә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә яңы объект индерелде, инвестицияларҙың дөйөм күләме яҡынса 266 миллион һум тәшкил итә. Унда 152 эш урыны булдырыу күҙаллана. Был хаҡта Иҡтисади үҫеш министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Инвестиция проектының маҡсаты - Стәрлетамаҡта икенсел ресурстарҙы тәрән эшкәртеү буйынса производство, шулай уҡ ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар полигонын ойоштороу.

✓"Газпром нефтехим Салауат" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте нигеҙендә тәбиғи газды этиленға һәм пропиленға эшкәртеү буйынса етештереү комплексын төҙөү тураһында мәсьәлә тикшерелде. Проекта инвестициялар күләме бер нисә миллиард долларҙан ашыуы ихтимал. Был турала "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең төбәк сәйәсәте буйынса комиссия ултырышында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов белдерҙе.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубының логотибына 20 йылдан ашыу. Шуға ла командала эблеманы үҙгәртергә теләп, барлыҡ теләүселәр араһында конкурс иғлан иттеләр. Конкурсҡа эштәр 2017 йылдың 1 ноябренән 2018 йылдың 1 мартына тиклем ҡабул ителә. Хоккей клубында билдәләүҙәренсә, конкурсҡа эштәр һаны сикләнмәгән. Еңеүсе 100 мең һум күләмендә премия аласаҡ.

✓Башҡортостан биләмәһендә йәйәүлеләрҙе тапатып китеү осраҡтары йышайҙы. Республика дәүләт автоинспекцияһы тәүләктең ҡараңғы осоронда, шулай уҡ йонсоу көндә күренеү мөмкинлеген тәьмин итеү өсөн бөтә йәйәүлеләргә лә өҫкө кейемендә яҡтылыкты кире ҡайтарыусы элементтар ҡулланырға кәңәш итә.

✓Башҡортостандың Балтас районында 15-17 ноябрҙә "Тамаша" республика һәүәҫкәр театрҙар фестивале уҙа. Байрамда йәштәр һәм ололар һәүәҫкәр театр коллективтары ҡатнаша. Ижади лабораторияла ҡатнашыуға ғаризалар 2017 йылдың 15 ноябренә тиклем guk-rcnt@mail.ru, tan.calmurzina@yandex.ru электрон адрестарына ҡабул ителә.Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн телефон: (347) 289-66-96.

✓Рәсәй гидрометеорология үҙәге ноябргә һауа торошо фаразын баҫып сығарҙы. Көҙҙөң һуңғы айы республикала ғәҙәттәгегә ҡарағанда йылыраҡ буласаҡ. Әммә төбәккә аномалия килә. 7-10 ноябрҙә республикала ҡар ята. Был аҙнала Башҡортостанға минуслы һауа температураһы ҡайта.

ҠЫҪҠАСА

# КЕМГӘ ЫШАНЫРҒА?

✓ **Башҡортостан Республикаһында ниндәй төҙөүселәрҙең өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыусылар алдында үҙҙәренең бурыстарын үтәмәүе билдәле булды.** Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, улар Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының да контроленә алынған. Исемлек түбәндәгеһә: "Меркурий", "Луч" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәре, "СК Трест № 21" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, "Крона" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте, "БашИнвестДом" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте, "Новый дом", "Цветы Башкортостана" торлаҡ-төҙөлөш кооперативтары, "Единая торгово-закупочная компания", "Артемида", "Регион-Сервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәре, "Дом по ул. Гафури 10-12" торлаҡ-төҙөлөш кооперативы, "СтройПроектЦентр" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, "Башстрой", "Служба заказчика" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәре.

✓ **Өфө ҡалаһының барлыҡ мәктәптәре, балалар баҡсалары һәм өҫтәмә белем биреү учреждениелары Интернет селтәренә тоташҡан.** Мәктәптәрҙең 80 проценты сымһыҙ интернет менән эшләй. Бер компьютер менән ете уҡыусы шөғөлләнә. Шулай уҡ белем усаҡтарында кабинеттарҙың 80 проценты мультимедиа һәм интерактив компоненттар менән йыһазландырылған. Бөгөн интернет селтәренә 111 (88 процент) мәктәп китапханаһы тоташтырылған. 208 (91 процент) балалар баҡсаһында белем биреү программаһы мультимедиа һәм интерактив белем биреү ҡоралдарын ҡулланып тормошҡа ашырыла. 2017 - 2018 уҡыу йылы башында мәктәптәрҙә электрон дәреслектәр 28 меңгә еткән. Электрон белем биреү порталында, мәктәптәрҙең сайттарында, башҡа ресурстарҙа педагогтарҙың 17 мең материалы ирекле ҡулланыуға ҡуйылған. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ менән берлектә "Асыҡ мәктәп" проекты тормошҡа ашырыла һәм бик күп башҡа эштәр башҡарыла.

✓ **Өфөнөң Ленин майҙанында металл конструкцияларынан 300 килограмм ауырлыҡтағы "Магнолия" һәм 200 килограмм ауырлыҡтағы "Йондоҙ" яңы йыл шыршылары ҡуйыласаҡ.** Байрам мәшәҡәттәренә ҡала хакимиәте 6,95 миллион һум аҡса һалған. Был килешеүҙең башланғыс хаҡы. Башҡарыусы 20 ноябрҙә билдәләнә, ә 25 декабргә ҡала яңы йыл "кейемендә" торорға тейеш. "Конгресс-холл" эргә-тирәһен яңы йылса биҙәүҙе хакимиәт 6 миллион 745 мең һумға баһалаған. Бында боҙ ҡаласығынан тыш фейерверктар өсөн майҙансыҡтар урынлаштырыу эштәре күҙалланған. Тимәк, яңы йыл төнөндә өфөләр фейерверк ҡарай аласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МИЛЛИ МУЗЫКА ҠЫҘЫҠҺЫНДЫРА



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов граждандарҙы ҡабул итте. "Йатаған" башҡорт этно-төркөмө етәксеһе Илдар Шакиров уға музыкаль коллективты үҫтереү өсөн ярҙам күрһәтеү мөрәжәғәтен еткерҙе.**

"Йатаған" төркөмөн республика халыҡтарының этник музыкаһын һаҡлау һәм популярлаштырыу маҡсатында 2014 йылда З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлаусылар ойоштorған. Коллектив үҙенең композицияларын заманса аранжировкалар менән бергә эксклюзив башҡорт халыҡ уйын ҡоралдарында, шул иҫәптән ятағанда, ҡыл-ҡумыҙҙа, ҡумыҙҙа, ҡурайҙа, думбырала, бишҡылда, доңъялағы башҡа халыҡтарҙың инструменттарында башҡара. "Йатаған" төрлө халыҡ-ара конкурстарҙа һәм фестивалдәрҙә республика исеменән сығыш яһай. Быйыл коллектив "Себер доньяһы" халыҡ-ара этник музыка һәм һөнәрҙәр фестивалендә "Инструменталь ансамбль" номинацияһында лауреат исемен алды. Яңыраҡ ҡына төркөмдөң рәсми альбомы сыҡты, уны интернет-платформалар ярҙамында ла таратыу күҙаллана. Илдар Шакиров коллективтың боронғо төрки уйын ҡоралы - ятаған - хөрмәтенә аталғанын һөйләне. Ул ҡөснәгә (гусли) һәм япондарҙың котоһына оҡшаш. Республика Башлығы инструменттың төҙөлөшө менән ҡыҙыҡһынды һәм унда уйнап ҡараны. Ул Башҡортостан халыҡтарының милли музыкаһын үҫтереүҙең мөһимлеген билдәләне һәм республика Хөкүмәте вице-премьеры Салауат Сәғитовҡа музыкаль төркөмгә ярҙам күрһәтеү варианттарын әҙерләргә ҡушты.

# ХЕҘМӘТ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ ҠАРАЛДЫ

**1 ноябрҙә муниципалитетта хакимиәт башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов етәкселегендә Өфө ҡала хакимиәтендә социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы территориаль комиссия ултырышы үтте. Уның эшендә ҡыҙыҡһыныусы яҡтар ҡатнашты. Кәңәшмә барышында 2017 йылдың тәүге яртыһында Территориаль килешеүҙең үтәлеше тикшерелде.**

Ғәмәлдә, ошо осорҙа ҡалала социаль-иҡтисади үҫештең барлыҡ төп күрһәткестәре буйынса ыңғай динамика күҙәтелә. Ҡаланың эре һәм урта предприятиелары төбәк продукцияһы күләменең яртыһынан күберәген етештергән. Сәнәғәт етештереүе индексы 103,9 процент тәшкил итә. Ҡала бюджеты социаль йүнәлешен һаҡлай. Эш биреүселәр ҙә хеҙмәткәрҙәргә социаль ярҙам күрһәтә. Хеҙмәт баҙарында ла ыңғай үҙгәрештәр бар. Өфөлә теркәлгән эшһеҙҙәр һаны кәмей - һәр эшһеҙгә 4 вакансия тура килә. Социаль партнерлыҡ яҡтары эш хаҡы буйынса тотҡарлыҡтарҙы бөтөрөү буйынса ла әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Иң ныҡ проблемалы ойошмалар комиссияла тикшерелә. Һөҙөмтәлә ярты йылда 14 ойошманың дөйөм суммаһы 6 миллион һум булған бурысы түләтелгән, хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләмәгән 45 яңы ойошма асыҡланған. Шулай уҡ контроль-тикшереү органдары тарафынан эш хаҡын арттырыу, хеҙмәт мөнәсәбәттәрен легаллләштереү һәм "күләгәле" эш хаҡын түләү мәсьәләләрен тикшерә. Дөйөм алғанда, йылдың тәүге яртыһында килешеү бар яҡлап та үтәлгән.

# ЛАЙЫҠЛЫ БАҺА



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Бөтә Рәсәй муниципаль берәмектәр конгресы кәңәшмәһендә ҡатнашты. Сара Рәсәй субъекттарынан барлығы 400-ҙән ашыу делегатты, башҡарма һәм закондар сығарыу власы, урындағы үҙидара органдары, муниципаль берәмектәр советтары, социаль йүнәлештәге Коммерцияға ҡарамаған ойошмалар, Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы органдары, йәмәғәт советтары һәм палаталары, ауыл старосталары, ирекмәндәр ойошмалары етәкселәрен йыйҙы.**

Форумда урындағы үҙидаралыҡ өлкәһендәге ҡануниәт, халыҡ-ара муниципаль-ара хеҙмәттәшлек мөмкинлектәре һәм перспективалары мәсьәләләре, шулай уҡ Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары һәм урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә граждандарҙың ҡатнашыуының башҡа формалары ҡаралды. Сара барышында "Муниципаль берәмектәрҙең Дөйөм Рәсәй конгресы" ассоциацияһы менән Халыҡ-ара эре баш ҡалалар һәм ҙур ҡалалар ассамблеяһы (МАГ) араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Уға МАГ президенты Ирек Ялалов менән "Муниципаль берәмектәрҙең Дөйөм Рәсәй конгресы" (ОКМО) ассоциацияһы Президенты Виктор Кидяев ҡул ҡуйҙы. Тантана барышында ике ойошманың эшмәкәрлеген берләштереү урындағы үҙидаралыҡтарҙың мәнфәғәтен сағылдырыусы институттарҙы үҫтереүҙә сираттағы мөһим аҙым буласағы, ике ойошманы ла эшмәкәрлектең барлыҡ кимәлдәрендә тағы ла сифатлыраҡ кимәлгә сығарасағы билдәләнде. Шулай уҡ ҡалаларҙы һәм муниципаль берәмектәрҙе берләштереүсе йәмәғәт ойошмаларының ошо ҡалалар һәм биләмәләр халҡының именлеге хаҡына тырышлыҡтарын берләштерергә кәрәклеге билдәләнде. Ошо маҡсаттан МАГ 2016 йылда Рәсәй Федерацияһы ҡалаларының иң эре йәмәғәт берләшмәһе - Рәсәй ҡалалары союзы менән килешеү төҙөй ҙа инде.

- Конгресс эше һөҙөмтәһендә 65 субъектта төбәк советтарының дәүләт власы органдары менән хеҙмәттәшлеге тураһында закон ҡабул ителгән һәм был эш әле лә дауам итә, - тине үҙ сығышында РФ Дәүләт Думаһы депутаты Виктор Кидяев. - Бынан тыш, бик күп төбәктәрҙә РФ субъекттары Уставтарына ярашлы, муниципаль берәмектәр советтары закондар сығарыу инициативаһы хоҡуғына эйә. Был бик кәрәкле ҡорал.

Сара һуңында иң лайыҡлылар баһаланды. Күп йыллыҡ хеҙмәте һәм урындағы үҙидаралыҡты үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн Халыҡ-ара эре баш ҡалалар һәм ҙур ҡалалар ассамблеяһы (МАГ) президенты, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидаралыҡты үҫтереүҙәге ҡаҙаныштары өсөн" Почет билдәһе менән наградланды.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы сайтында һалым белдереүен алыу өсөн экспресс-тәҙрә асылды. Бында һалым түләүсе ғариза бирә һәм, йәшәгән урынына ҡарамаҫтан, белдереү алыу өсөн исемлектәге инспекцияның теләһә ҡайһы офисын һайлай ала. Ошо белдереү ҡағыҙҙары офистарҙағы экспресс-тәҙрәләрҙә таратыла.

✓Башҡортостанда буласаҡ яҙғы сәсеүгә тупраҡты туңға эшкәртеү дауам итә. Һөрөлгән ер яҡшыраҡ "тын ала" һәм дым туплай, ә ул иһә уңышты арттыра. Октябрь аҙағына майҙандарҙың 83 проценты (1,13 миллион гектар) туңға һөрөлгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығында.

✓Башҡортостандың Бөрйән районында урындағы халыҡ бүреләрҙең һөжүм итеүенә зарлана, йыртҡыстар хатта шәхси ихаталарға инеүҙән ҡурҡмай. Мәсәлән, Килдеғол ауылында бүреләр бер нисә һарыҡтың башына еткән. "Бағаналарҙа төндә ут янмағас, бүре ҡапҡа эсендә рәхәтләнеп йөрөй. Уларҙың кешегә лә ташланыуы мөмкин", - тип яҙған "Бөрйәндәр" төркөмөндә берәү.

✓"Рәсәй-Башҡортостан радиоһы" быйыл үҙенең 90 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Ошо йылдар эсендә республиканың төп радиоһы йәмәғәт тормошонда иң оператив, эшлекле һәм демократик киң мәғлүмәт сараһы булараҡ лайыҡлы урын яуланы. "Рәсәй-Башҡортостан радиоһы" Өфөлә FM-диапазонында 89,5 йышлыҡта, республика район-ҡалаларында ультра ҡыҫҡа тулҡындарҙа, шулай уҡ интернетта gtrk.tv сайтында онлайн рәүештә эфирға сыға.

✓Башҡортостан фехтование мәктәбенең 26 йәшлек тәрбиәләнеүсеһе Тимур Арыҫланов Рәсәй йыйылмаһы составында Мысырҙа үткән донъя кубогы этабында көмөш миҙал яуланы. Уның менән бергә ярышта республикабыҙҙан тағы бер спортсы Аҫҡар Хәмзин ҡатнашты. Тимур Арыҫланов ошо көмөш миҙалдан тыш, Рәсәй ярыштарында көмөш һәм алтын миҙалдарға эйә.

✓Урал арьяғында яңы ҡояш электр станцияһын йыл аҙағынаса файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. Ейәнсура районында Иҫәнғол ҡояш электр станцияһының ҡеүәте 9 МВт тәшкил итәсәк. Объекттың инвесторы - "Хевел" компаниялар төркөмө структуралары ("Ренова" компаниялар төркөмө һәм "РОСНАНО" акционерҙар йәмғиәтенең уртаҡ предприятиеһы). Объектты 2017 йылдың апрелендә төҙөй башланылар. Әлеге ваҡытта электр станцияһында көйләү эштәре бара.

✓ *Ә махсус хеҙмәттәр шул юл менән аҡса эшләй. Ярай ҙа, машина хужаһы минең һымаҡ үткер кеше булһа, ә ауылдарҙан йомоштарын йомошлау өсөн килгән бәндәләр нимә эшләргә тейеш?*



*БАШ ҠАЛАМ*

**Баш ҡалала парковка мәсьәләһе киҫкен тора. Хәрәкәткә ҡамасаулаған транспортты эвакуациялау ғына мәсьәләне хәл итмәй, сөнки был халыҡтан аҡса "һауыуҙың" сираттағы бер юлына әйләнеп бара. Ғәҙәттә, ҡала халҡы бик зыян күрмәй, ә бына ауыл еренән килгән хәйләһеҙ халыҡ бик йыш һуңғы тинен сығарып һалырға мәжбүр була. Был хәл-торошҡа бигерәк тә дауаханаға килеүселәр йыш тарый. Өфөнөң "Автопарковка урындарын төҙөкләндереү һәм тотоу буйынса" МБУ-һы шундай сервис асҡан, тиҙәр: әгәр ufa-parkovka.ru сайтында теркәлһәгеҙ, автомобилегеҙҙе эвакуациялау тураһындағы хәбәр шунда уҡ кеҫә телефоныһыҙға киләсәк, имеш. Ләкин был ғына проблеманы бер ни тиклем кәметә алыр тип уйлайһығыҙмы? "Тимер атын" Өфө буйлап бер нисә тапҡыр эҙләп йөрөгән журналист Сибәғәт РАХМАНҒОЛОВ үҙенең башынан үткәндәр тураһында һөйләмәксе бөгөн.**

# КИЛҺӘҢ ДАУАХАНАҒА...

## булыр эштәрең "хана"



- Бер йылды баш ҡалабыҙҙың Карл Маркс урамындағы отелдең конференциялар залында кәңәшмәгә йыйҙылар. Ҡыш башы ине ул. Мин машинамды отель алдындағы туҡталышҡа ҡуйып, кәңәшмәгә юлландым. Ашығып килгәс, өҫ кейемемде лә алып тормағанмын. Сара бөтөп, урамға сыҡһам, "тимер арғымаҡтан" елдәр иҫкән.

- Машинам ҡайҙа икән? - тип һорайым отель хеҙмәткәрҙәренән.

- Эвакуатор алып китте, - тиҙәр былар, күҙҙәрен дә йоммай.

- Бәй, нисек алып китә ала улар? Мин бит ҡағыҙҙа боҙмағанмын.

- Ә бында отель хеҙмәткәрҙәренә генә ҡуйырға рөхсәт ителә - яуап шулай булды.

Бер ҡат пинжәктә генә Өфө урамдары буйлап барғанымды күргән халыҡ ғәжәпләнеп тә, аптырап та минә ҡарай. Сатлама һыуыҡта нишләп йөрөй икән был бисара ялан өҫ, тиҙәрҙер инде, күрәһең. Ярай әле, ярты юлды үткәс, Өфөләге дуҫтарым ебәргән шофер егет артымдан килеп етте. Уның менән штраф туҡталышына ҡуйылған автомобилемде барып тапҡансы, тейешле аҡсаһын түләгәнсе, байтаҡ ваҡыт үтте. Планлаштырған эштәремде эшләй алмай, ҡайтыр яҡҡа ыңғайланым.

Икенсе бер ваҡыт Достоевский урамындағы Республика клиник дауаханаһына килгәндә йәнә машинамдан ҡолаҡ ҡаға яҙҙым. Эштәремде тамамлап, урамға сығыуыма, машинамды "тышаулап", эвакуаторға тағып та маташалар.

- Нимә эшләйһегеҙ! Тиҙ генә ысындырығыҙ! - тип ҡысҡырып ебәреүемә, ҡулдарына тимер арҡан тотҡан егеттәр ҡойолоп төштө. Быны һиҙеп, мин уның һайын ҡыҙҙым. - Ҡайҙа командирығыҙ, ниндәй баш-баштаҡлыҡ ул!

Пинжәгемдең яғаһында БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттарының билдәләренә оҡшаш значок тағылған, шуға ҡарай былар.

- Ғәфү итегеҙ. - Егеттәр минең машина янынан табандарын ялтыратты. Былар иҫ-аңдарына килмәҫ борон тип, мин дә был тирәнән һыҙыу яғын ҡараным.

Ә смс-хәбәргә килгәндә, бөтөн кәсептәргә машиналарҙы алыуға ҡоролған ойошманың хеҙмәткәрҙәре, ай-һай, автомобиль хужаһын иҫкәртерме икән? Тәүге мәлдәрҙә барыһына ла ебәрерҙәр, бәхәсләшмәйем. Ләкин беҙҙә һәр бер яҡшы башланғысҡа тора-бара тут ҡуна бит. Ә махсус хеҙмәттәр шул юл менән аҡса эшләй. Ярай ҙа, машина хужаһы минең һымаҡ үткер кеше булһа, ә ауылдарҙан йомоштарын йомошлау өсөн килгән бәндәләр нимә эшләргә тейеш? Ярай, ҡала халҡы уҫал да, үҙен яҡлай ҙа белә, ә ауыл кешеһе ҡалала барыбер үҙен ышаныслыҙ тоя. Икенсенән, онотҡанда бер ҡалаға киләм тип кенә улар ниндәйҙер сайттарҙа теркәлеп ултырырмы икән? Бында, минеңсә, күберәк, бигерәк тә Республика клиник дауаханаһынан башлап, башҡа дауаханалар эргәһендә ситтән килеүселәр ҙә транспортын бер хәүефһеҙ ҡуя алырлыҡ парковка урындары булдырыу урынлыраҡ, ә шарттар тыуҙырмай тороп, хоҡуҡ һаҡлаусылар был проблеманы аҡса эшләү сығанағына әйләндереүҙе дауам итәсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

*АФАРИН!*

# ЭШСЕ ҺӨНӘРЕ ЛӘ...

## илдәр гиҙҙерә

**(Башы 1-се биттә).**



"Тәүҙә таш эшкәртеүҙең айышына төшөнмәйенсә шөғөлләнә башланым, һуңынан остаздарым Марина Попова һәм Әскәт Ишбаев етәкселегендә оҫталығымды арттырып, төрлө ярыштарҙа ҡатнашып ҡарағас, был эштә ниндәй тырышлыҡ, етдилек талап ителеүен аңланым. Колледж оҫтаханаһына иртән иртүк киләм, ҡараңғы төшкәс кенә эштәрҙе тамамлап ҡайтам. Тырышлығым бушҡа булмауына шикһеҙ шатмын", - ти Рафаэль Яхин. Ул эзбизташтан архитектур арка һәм кронштейн яһау буйынса ун бер таш эшкәртеүсе араһында барған ярышта Бразилия һәм Англия оҫталарынан саҡ ҡына ҡалыша. Әҙер изделие эксперттар тарафынан ентекле тикшерелә, бер миллиметрға дөрөҫ булмаһа ла хата иҫәпкә алына икән.

Сибай күп профилле һөнәрселек колледжы студенттары WorldSkills Competition чемпионатында ҡатнаша башлағас, был уҡыу йортонда белем алырға теләүселәр һаны бермә-бер артҡан. Колледж директоры Лундеж Байморатов әйтеүенсә, бында йәш кеше диплом менән бергә тормошта кәрәкле һәм йәмғиәткә файҙалы һөнәр ҙә үҙләштерә. Уның менән әңгәмәләшкәндә "Кеше кешеләргә кәрәк булһын" тигән шиғри юлдар иҫкә төштө, һис шикһеҙ, йәш кешегә тормошта үҙ урынын һәм күңеленә яҡҡан шөғөлөн табырға ярҙам итеүҙәре хуплауға лайыҡ. Был турала БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова ла телгә алды һәм педагогтарҙың да, тырыш йәштәрҙең дә хеҙмәтен юғары баһаланы.

WorldSkills Competition чемпионатында Рәсәй 2013 йылдан башлап ҡатнаша, Башҡортостан был йүнәлештә 2016 йылдан даими рәүештә эшләй. Республика төрлө һөнәр оҫталарын ярышҡа әҙерләп, Рәсәй кимәлендә хәҙер ун өсөнсө урынға күтәрелгән.

- Әле төбәк чемпионатына әҙерлек бара, 37 компетенция буйынса йәштәребеҙ үҙ көсөн һынарға йыйына. Унда колледж студенттары, JuniorSkills программаһы буйынса мәктәп уҡыусылары һәм 1-се курс студенттарын көтөп ҡалабыҙ. Сибай күп профилле һөнәрселек колледжынан тыш, бындай ярыштарға йәштәрҙе Стәрлетамаҡ һәм Кушнаренко күп профилле һөнәрселек колледждары, Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы, Нефтекама нефть колледжы һәм Нефтекама машиналар эшләү колледжы бик яҡшы әҙерләй. Киләсәктә йәш һөнәрселәр донъя кимәлендә үҙ оҫталығын күрһәтеүҙән тыш, төбәккә үҙҙәре эшләгән өлкәне үҫтерергә, юғары квалификациялы эшселәр тәрбиәләргә лә ярҙам итер, тип өмөтләнәбеҙ, - тине Башҡортостандағы WorldSkills Russia төбәк координационы үҙәге етәксеһе Илшат Рәхмәтуллин.

Әйткәндәй, WorldSkills һөнәри оҫталыҡ буйынса үткәрелгән төрлө кимәлдәге чемпионаттарҙа оҫталар бер тапҡыр ғына ҡатнаша ала. Шуға, донъя чемпионатында һынатмай, өсөнсө урын яулаған Рафаэль Яхин киләсәктә был ярышта эксперт булараҡ сығыш яһаясаҡ. Уның өйрәнсеге Илмир Сәйетбатталов быйыл Краснодарҙа үткән милли чемпионатта беренсе урын яулаған да инде. Киләсәктә ошондай ярыштарҙың йәштәр араһында эшсе һөнәрҙәрен популярлаштырыу өсөн генә түгел, ә һәр кемде үҙ эшен яратып, еренә еткереп башҡарырға ла өйрәтер һәм республика был йәһәттән беренселәр рәтендә булыр, тигән ышаныс бар.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Мүк еләге

❖ Ҡыш - мүк еләге (клюква) миҙгеле. Мүк еләге йөрәк, ҡатын-ҡыҙҙар сирҙәре һәм башҡа ауырыуҙарҙан файҙалы.

❖ Мүк еләге һутын ҡулланыу енси юлдар инфекцияһы барлыҡҡа килеүен һәм таралыуын булдырмай, сөнки мүк еләге һуты бактерияларға кеше күҙәнәктәрендә һаҡланып ҡалырға мөмкинлек бирмәй. Ҡатын-ҡыҙҙарға шәкәр ҡушылмаған мүк еләге һутын йышыраҡ эсергә кәрәк.

❖ Мүк еләгендәге проантоцианидин органик ҡушылмаһы тештәрҙе таш һәм юшҡындан таҙарта, шуға ла пародонтозды иҫкәртеү өсөн мүк еләге ҡулланыла.

❖ Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға мүк еләге һутын бер нисә ай дауамында ҡабул итеү ашҡаҙан яман шеше йәки язваһы барлыҡҡа килтерә торған бактерияларҙан ҡотолорға ярҙам иткән.

❖ Көн һайын бер стакан мүк еләге һуты эсеү юғары тығыҙлыҡтағы липопротеиндарҙың, икенсе төрлө әйткәндә, "яҡшы" холестериндың артыуына, ә түбән тығыҙлыҡтағыларының кәмеүенә килтерә.

❖ Мүк еләге төрлө шештәр барлыҡҡа килеүҙе иҫкәртә.

### Һыуыҡҡа аллергия

❖ Әгәр ҙә ҡышын ғына түгел, йәйен дә аяҡ-ҡулдарығыҙ өшөй икән, ҡанды һәм ҡан тамырҙарын таҙартып ҡарағыҙ. 100 грамм быуын сәскә тамырын (корень цикория) ваҡлап, 750 мл ҡыҙыл шарапҡа һалып 10 минут ҡайнатырға. 9.00 - 10.00 сәғәт араһында 1 стакан төнәтмәне йотомлап эсергә. Төнәтмә бөткәнсе көн һайын дауам итергә. Көнөнә 20 балан емеше ашау файҙалы, тик алдан уға ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтегеҙ.

❖ Ҡанды таҙартыу өсөн 2 бүлкәт һарымһаҡҡа 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут төнәтергә һәм ҡайнар килеш 6.00 сәғәткә тиклем ас ҡарынға эсергә. 2 ай дауамында аҙнаһына 1 тапҡыр ҡабатларға. Дауаланыу курсын йылына 3 тапҡыр ҡабатларға кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Ғүмеренә ҡурҡыныс янағаны

Ҡөрәйштәр иһә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең башы өсөн йөҙ дөйә вәғәҙә итә, байырға теләүселәр Йәҫрибкә алып барыусы бөтөн юлдарҙы һәм һуҡмаҡтарҙы байҡап сыға. Өс көндән һуң эҙләүҙән туҡтайҙар, сөнки был ваҡыт эсендә Мөхәммәт бәйғәмбәр Йәҫрибкә барып еткәндер, тип уйлайҙар.

Дүртенсе көнгә көтөүсе Әмир бер нисә көнгә етерлек ризыҡ һәм һыу менән йөкләнгән дөйәләр ҡыуып килтерә лә, бергәләп Йәҫрибкә юлланалар. Төндәрен баралар, оло юлға сыҡмайҙар. Бер нисә көндән Йәҫрибкә килеп етәләр.

Был - 622 йылдың 24 сентябрендә була. Ошоноң менән Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һижрәте тамамлана.

Бер нисә көндән һуң, Мәккәнең һуңғы мосолмандарын эйәртеп, Ғәли ҙә килеп етә.

### Мәҙинә ҡалаһына нигеҙ һалыу

Мөхәммәт бәйғәмбәр Йәҫрибкә күсеп килеү менән мосолмандар ҡаланы Мәҙинәт ан-нәби Бәйғәмбәр ҡалаһы тип исемләй. Аҙаҡ, ҡыҫҡарта биреп, Мәҙинә тип кенә йөрөтә башлайҙар. Ҡаланың был исеме бөгөнгө көнгә тиклем һаҡлана.

Мөхәммәт бәйғәмбәр оазистың урта тирәһендә мәсет һалдырырға була. Бында ул сәсеүлек өсөн яраҡһыҙ урын таба - ошо ерҙе урындағы кешеләр финик киптереү өсөн генә файҙалана. Был урын - етем ҡалған ике үҫмерҙең ере була. Ерҙе улар Мөхәммәт бәйғәмбәргә бүләк итеп бирергә уйлай, ләкин ул бушлай алыуҙан баш тартып, ерҙең тулы хаҡын түләй. Мәсетте төҙөгәндә Мөхәммәт бәйғәмбәр башҡалар менән бер тиң бил бөгә.

Бер йыл үтеүгә, мәсет төҙөлөп бөтә. Мәсет менән бергә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең йорттары ла төҙөлә. Был йорттар - дөйөм ишек алды менән берләштерелгән берәр бүлмәле балсыҡ биналар.

Мәсет һәм йорттар төҙөлгәндә Мөхәммәт бәйғәмбәр Әбү Әйүб исемле ансарҙың ике ҡатлы йортонда йәшәй. Йорт хужаһы хөрмәт йөҙөнән Мөхәммәт бәйғәмбәр өсөн икенсе ҡатты тулыһынса бушата башлай, ләкин бәйғәмбәр, Әбү Әйүбтең ғаиләһен артыҡ мәшәҡәтләмәҫ өсөн, беренсе ҡатта йәшәйәсәге тураһында әйтә.

623 йылда, мәсет һәм йорттар төҙөлөп бөткәс, Мөхәммәт бәйғәмбәр шунда күсә. Күскәс тә Ғәйшә менән туй үткәрә. Әйтергә кәрәк, Ғәйшәне ул айырыуса хөрмәт итә һәм ярата. Был тойғолары шул тиклем көслө була, хатта Ғәйшәнең унан бер тапҡыр:

- Мин һинә Хәҙисәне алмаштыра алдыммы? - тип һорарға батырсылығы етә.

- Хәҙисәне минә бер кем дә, бер ҡасан да алмаштыра алмаясаҡ, - тип яуап бирә Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Был көндәрҙә Ғәли менән Фатиманың туйы ла үткәрелә. Күңелле үткән был туй йәштәрҙең артабанғы тормошонда тулы ҡәнәғәтлек килтермәй - улар икеһе лә иҫ китмәле һәйбәт кеше булыуҙарына ҡарамаҫтан, бер-береһе менән татыу йәшәй алмай. Мөхәммәт бәйғәмбәргә әйләнгән һайын уларҙы татыулаштырып йөрөргә тура килә. Фатима Хәсән менән Хөсәйен исемле улдар таба. Уларҙан башҡа Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ир затлы ейәндәре булмай.

Күп тә үтмәй, ҡасандыр Эфиопияға күсенгән мосолмандар ҙа Мәҙинәгә килеп етә.

**(Дауамы бар).**

КӨНАУАЗ

# ЭШ ДӘРЕСЛЕКТӘ ГЕНӘМЕ?

**Быйылғы уҡыу йылы туған телдәрҙе уҡытыуға ҡағылышлы мәсьәләләр тирәһендәге шау-шыуҙар менән башланып китте. Ата-әсәләрҙән, балаңа туған тел дәресен һайлайһыңмы, юҡмы, тигән ғаризалар йыйыу ғына түгел, мәктәптәрҙә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына ярашлы дәреслектәр менән тәьмин итеү ҙә тейешенсә атҡарылмауы күптәрҙе аптырашта ҡалдырҙы. БР Мәғарифты үҫтереү институты өлкән ғилми хеҙмәткәре, педагогия фәндәре кандидаты Фәниә СЫНБУЛАТОВА менән тап шул турала - башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса дәреслектәрҙең бөгөнгө көнгә тиклем федераль исемлеккә индерелмәүе сәбәптәре хаҡында әңгәмәләштек.**






- Уҡыу йылы башында, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына яуап бирмәгән иҫке дәреслектәрҙе китапханала ғына тоторға ҡушылған, тип миңә лә шылтыратып әйтеүселәр күп булды. Педагогтар өсөн генә түгел, уҡыусылар өсөн дә был хәл ҡатмарлыҡтар тыуҙырҙы. 2018 йылға тиклем федераль дәреслектәр исемлеге формалашып бөтөргә тейеш икәнен БР Мәғариф министрлығында беләләр ине бит, әммә ниңәлер был эш тиҙләтелмәгән булып сыҡты. Әлбиттә, әлеге көндә тулыһынса тикшереүҙәр үтеп, гриф алған һәм федераль исемлеккә ингән берҙән-бер уҡытыу-методик комплект бар, мин уның авторымын. Был уҡытыу-методик комплект башҡорт телен яҡшы белгән һәм уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1-4-се синыф балалары өсөн тәғәйенләнгән. Беренсе синыф уҡыусылары өсөн "Әлифба" китабы яҙылған, уның ике төрлө эш дәфтәре, контроль эштәр дәфтәре, педагог өсөн методик ҡулланмаһы бар. "Әлифба"ны беренсе ярты йыллыҡта уҡыйҙар ҙа, шунан "Башҡорт теле" һәм "Әҙәби уҡыу" дәреслектәре буйынса эшләй башлайҙар. Был дәреслектәрҙең дә бөтә кәрәкле эш дәфтәрҙәре, методик ҡулланмалары һәм хатта электрон дәреслектәре бар. Сөнки федераль дәреслектәр исемлегенә индереү өсөн төп талаптарҙың береһе - электрон дәреслектәр ҙә булырға тейеш.

Икенсе синыфтан алып дүртенсегә тиклем "Башҡорт теле" һәм "Әҙәби уҡыу" дәреслектәре ике өлөштән тора, һәр өлөштөң эш дәфтәре, контроль эш дәфтәре, уҡытыусы өсөн методик ҡулланмаһы эшләнгән. Дәреслектәр программаһы Эльконин-Давыдов системаһы буйынса төҙөлгән, "Әҙәби уҡыу" дәреслегендә башҡорт һәм рус классиктарының әҫәрҙәре, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады, йолалары бирелгән. Сөнки дәреслектә 15-20 процент рус әҙиптәренең ижады булһын, тигән талап ҡуйылғайны дәреслек төҙөүсе алдына, шуға ярашлы рәүештә Некрасов, Крылов, Пушкин һәм башҡа билдәле шағир, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итеп индерҙек. Шул тиклем сағыу, матур дәреслектәр килеп сыҡты. Контроль эш дәфтәрҙәрендә һәр үтелгән тема буйынса уҡыусының белемен тикшереүгә ҡоролған төрлө күнегеүҙәр, тестар бирелгән. Унда бала дөрөҫ яуапты һайлап алыу, үҙе һөйләмде тултырып яҙыу, һүрәт төшөрөү кеүек төрлө эштәрҙе үтәргә тейеш. Уҡытыусы өсөн методик ҡулланмала дәрес өлгөләре, дәрес сәғәттәре һәм темалар бүлеп планлаштырыла, кәңәштәр бирелә.

Быны ошондай егерме йыллыҡ хеҙмәт емешем бөгөн З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте тарафынан баҫылып сыҡҡан һәм август аҙағы-сентябрь уртаһында Инорс биҫтәһендәге складта ята ине әле. Быltыр ҙа шул уҡ хәл булғайны, быйыл да БР Мәғариф министрлығы яңы дәреслектәрҙе таратыусы ойошмаға конкурсты август айында ғына ойошторҙо һәм ҡасан конкурс үтеп, юридик яҡтан бөтә мәсьәләләр хәл ителгәнсе, уҡыу йылы башланып та китте. Үткән уҡыу йылында ла ҡайһы бер мәктәптәргә дәреслектәр ноябрь айында ғына барып етте. Әле ул дәреслектәр таратыла башлаған, ҡайһы бер район мәктәптәре үҙҙәре машина яллап килеп алып ҡайтҡан, тиҙәр. Артабан да дәреслектәрҙе мәктәптәргә таратыу, конкурс иғлан итеп, таратыусы ойошма аша атҡарыласаҡ икән, был эш май айында уҡ ғәмәлгә ашырылырға тейештер бит инде.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса уҡыған балалар бөгөн етенсе синыфҡа уҡырға килде, тимәк, беҙгә урта синыфтар өсөн дә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса дәреслектәр сығарыуҙы тиҙләтергә кәрәк. Ун беренсе синыфҡа тиклем өс йүнәлештәге (туған тел, дәүләт теле, уҡыу теле булараҡ) дәреслектәр ҙә әҙер һәм гриф алыу өсөн бөтә инстанцияларҙы үтеп, әлеге көндә Мәскәүҙә Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының бойороғон көтөп ята. Әммә был фарман да тотҡарлана.

Әлбиттә, бөгөн беҙҙә, ошо дәреслектәрҙе әҙерләгән ғалимдарҙы, гриф алыу мәсьәләһе генә түгел, киләсәктә был дәреслектәрҙең кәрәге булырмы, юҡмы, тигән һорау ҙа борсой. Сөнки 16 сентябрь БР Мәғариф министрлығы тәҡдиме буйынса республика уҡытыусылары методик көн үткәрелгәндә ҡайһы бер мәғариф учреждениеларының башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ҡына өйрәнеүҙе һайлауы асыҡланды. Хатта башҡорттар күпләп йәшәгән райондарҙа башҡорт милләтле ата-әсәләрҙең балаларының туған теле - рус теле тип күрһәтеүе, башҡорт телендә уҡыуҙан баш тартыуы беҙҙе бөтөнләй аптырашта ҡалдырҙы. Мәҫәлән, үрҙә әйтеүемсә, минең башланғыс синыфтар өсөн әҙерләнгән уҡытыу-методик комплектым башҡорт телен яҡшы белгән балалар өсөн тәғәйенләнгән. Ата-әсәләр балаларын туған телдә уҡытыуҙан баш тарта икән, гриф алынһа ла, федераль исемлеккә индерелһә лә, ул дәреслектәрҙең ҡулланылмай ҡалыу ҡурҡынысы ла бар. Ә шулай ҙа, был хәлгә юл ҡуйылмаҫ, урындағы белем биреү учреждениелары етәкселәре лә, педагогтар ҙа, ата-әсәләр ҙә башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы ҡарарҙарҙы уйлап ҡабул итер, хәлде төҙәтерҙәр, тигән өмөт бар.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

✓ *Башҡорттарҙа колонизаторҙарҙы ҡурҡытырлыҡ көс һаман да булған әле. Шул ҡурҡыныстан ҡотолоу, башҡорттоң ҡеүәтенең тамырын ҡоротоу маҡсатында ерҙе күрәләтә талағандар.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Башҡорт халҡының тарихын төплөрәк өйрәнгән һайын ниндәйҙер яңы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр асыла бара. Уны бары ҡалыплашҡандан айырып, яратып, үҙ итеп өйрәнергә генә кәрәк. Ошондай фекерҙә хөрмәтле шәхесебеҙ, тарих фәндәре докторы Нәзир Мырҙабай улы ҠОЛБАХТИН. Беҙ ҙә уның был фекере менән килешәбеҙ һәм уның бәйәнендә гәзит уҡыусыларыбыҙға тарихыбыҙҙың ҡайһы бер ҡыҙыҡлы биттәре менән танышырға тәҡдим итәбеҙ.**

# БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠ КҮСМӘ ТҮГЕЛ,

## ә сауҙәгәр ҙә, игенсе лә, сәнәғәтсе лә булған

**➔ Тарихи хәл-ваҡиғаларҙы тикшереү, асылда, нимәгә нигеҙләнергә тейеш?**

- Тарих өлкәһендә тикшеренер, эҙләнер һәм асыҡлауҙарҙы киң публикаға сығарыр өсөн иң беренсе социаль-иҡтисади фактор булырға тейеш. Был өлкәне ситләп үтеү тарихты бары эмоциональ кимәлдә генә өйрәнеү ул. Бөтөн хәл-ваҡиғаларҙың да иң төбөндә социаль-иҡтисади сәбәптәр ята. Социализмды тарҡатып, марксизм-ленинизмды юҡҡа сығарғас, методология тигән булып, көнсығыш ғалимдарының тикшеренеү үҙенсәлегенә күсеп киттек. Ә улар донъя тарихын дин менән бәйләй. Был бик үк дөрөҫ түгел. Бөтә нәмә нигеҙендә социаль-иҡтисади база тора, тип ҡабатлайым тағы ла. Ни генә тигәндә лә, совет осоро бик ҙур төҙөлөштәр алып барҙы. Һәм әлеге көндә лә, ул системаны туҙҙырып ташлағандан һуң да, беҙ әле һаман шул заман төҙөгән заводтар, фабрикалар, ауыл хужалығы ҡалдыҡтары менән файҙаланабыҙ. Бына шулар ҙа серепемерелеп бөтһә, нимә булыр? Дин - рухи аҙыҡ, тибеҙ, әлбиттә. Әммә әлегә тиклем тарихта бер ниндәй дин дә кешеләрҙең йәшәү сығанағы булған социаль-иҡтисади өлкәне ҡайғыртҡаны юҡ. Был минең фекерем.

**➔ Һеҙ башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөү тарихын яҡтырттығыҙ. Бындай төҙөлөштәр кире күренешме, әллә уның ыңғай яҡтары ла бармы?**

- Башҡортостан ерҙәрендә заводтар һалыныуының ыңғай яҡтары ла күп. Өс йөҙ йыл буйына һалынған заводтар Башҡортостанға совет власы осоронда ла алдынғылар рәтендә йөрөргә мөмкинлек бирҙе. Әммә шуныһы ла бар: башҡорттарҙың ун алты процент ере заводтарға бирелә, йәғни халыҡ һәр алтынсы дисәтинәһен юғалта. Мәҫәлән, Шәрәмәт заводын төҙөтмәү өсөн ғәйнә башҡорттары ун йыл буйына һуғыша. Ҡорал күтәреп түгел, ә закон юлы менән. Һәм еңеп сығалар. Свердловск өлкәһе ерҙәрендә төҙөләсәк заводтарға ҡаршы булып, Полевский тигән кеше менән салйот башҡорттары ҡыйыша. Салйоттарҙың сотнигын Өфөлә ике-өс ай төрмәлә тотоп, ҡаршы булмайым, тигән ҡултамғаһын алып сығаралар. Әммә ул ҡайта ла, тағы көрәш юлына баҫа. Нуғай даруғаһындағы ер эшкәрткән башҡорттар өсөн ер ҡәҙерле була шул. Әй буйы, Йүрүҙән буйы башҡорттары ла, шул иҫәптән Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин да, Сим заводын һалдырмау өсөн ике тапҡыр судлаша. Башҡорттар ул заманда заводтарҙы ерҙәрҙе тартып алыусы звено итеп кенә күрә. Тарихыбыҙҙағы был тема әлегә тиклем өйрәнелеп етмәгән өлкәләрҙең береһе, йәштәр тарафынан да был һорауҙың йүнләп күтәрелгәне юҡ.

**➔ Заводтарға ер биреү ниндәй тәртипкә нигеҙләнә һуң? Был эш һәр ваҡыт алдаҡ юл менән генә атҡарылмағандыр бит?**

- Заводтарға ерҙе тик талап ҡына алмағандар. Әлбиттә, һәр бер помещик алдарға телләгән инде ул. Л. Толстойҙың әҫәрендәге ҡояш байығансы ер айҡап йүгергән һәм талсығып үлгән урыҫ кеүек. Был теләк байҙарға ғына түгел, ә бөтә килмешәктәргә, ербаҫарҙарға ла хас булған. Сөнки үҙәк өйәҙҙәрҙә ерһеҙ аслытуҡлы йәшәгән халыҡ, бында килеп, шундай иркенлекте күреп, нәфсеһен ҡотортоп ебәргән бит. Ә ерҙәрҙе күп осраҡта һатҡандар. Мәҫәлән, үрҙә әйтелгәндәгесә, Юлай Сим ерҙәре өсөн көрәшә лә, уны өс айға төрмәгә бикләгән мәлдә старшина ролен үтәгән Шығанай Борсаҡов килешеү төҙөп, ерҙәрен һатып та ебәрә. Шуның кеүек ер һатыусылар күп була.

19-сы быуатта Бишбүләк башҡорттары сыуаштар менән ер өсөн талаша. Аҙ ер өсөн дә түгел, 150 мең дисәтинә, был әлеге тотош райондың ере тигән һүҙ. Ҡасандыр, 18-се быуатта 5-6 сыуаш килеп, башҡорттарҙан ер һорай. Былары бирәләр. Әлеге документтар менән эш итә белмәү инде - ерҙең сиктәре билдәләнмәй. Күпмелер ваҡыттан һуң биш сыуаш янына унау килә, унан тағы унау һәм аҙаҡҡы сиктә бер-нисә оло ауылдар үҫеп сыға. Башҡорттар судлаша башлаһа, тегеләр ҡул ҡуйылған документтарын күрһәтә.

Заводтарҙы төҙөүҙә лә бына ошо механизм ҡулланыла. Помещиктар килеп, ергә килешеү төҙөй ҙә, ерҙең сиктәрен билдәләмәй, башҡорт "ана шул ҡарағайҙан, шул йылғаға саҡлы" тигән һымаҡ килешеү менән бирә ерҙәрен. Йылдар ағымында теге ҡарағай ҙа,



йылға ла "урынынан шыла", ә башҡорттоң ризалыҡ биргән ҡултамғаһы ҡала.

Ер һатыуҙағы хаталарҙың тағы бер миҫалы бар. Бына, мәҫәлән, Силәбе өлкәһендәге башҡорт ерҙәрендә заводтар ҙа, ҡәлғәләр ҙә бик йыш урынлаштырыла. Был нимәнән шулай һуң? Башҡорт старшиналары ерҙе башта бер хужаға һата. Улары документтар төҙөп алып китә лә күпмелер ваҡытҡа юғала. Ул ҡабат килеп күренмәгәс, халыҡ шул уҡ ерҙәрҙе икенсе кешегә һата. Хатта бер үк ерҙәрҙең өс тапҡыр һатылыу осраҡтары ла була. Унан һуң, күпмелер ваҡыт үткәс, теге хужалар пәйҙә була һәм законлы нигеҙҙә ерҙәрен ҡайтарыуҙы талап итә. Башҡорттар әлеге өс хужаға ла һатылмай торған урындан да ер бирергә мәжбүр була.

Златоуст заводына 300 мең дисәтинә ер һатыла. Был ер өсөн 300 һум аҡса алына. Аттың хаҡы 10 һум булғанда, башҡорт өсөн был аҡса бер өйөр ат булып күренә. Йәғни, тормоштағы ҡиммәттәрҙең төрлө булыуы хәл итеүсе фактор булып тора бында. Алданып ҡына түгел, ә ерҙе байлыҡ итеп ҡабул итә белмәүе арҡаһында ла ерҙәренән яҙа башҡорттар...

**➔ Башҡорт ерҙәренә завод-ҡәлғәләр төҙөү һәм сит милләт халыҡтарын күсереп ултыртыу башҡорттоң йәшәйешенә генә түгел, ә рухи тормошона ла үҙгәрештәр индергән һәм, күп осраҡта, был үҙгәрештәр колонизаторҙар файҙаһына булмаған, шулай бит?**

- Башҡорт ерҙәренә заводтар һалынып, был заводтарға үҙәк уездарҙан крәҫтиәндәр килтерелә. Миҫал өсөн: Твердышевтарҙың ғына һатып алып килтергән 19 мең крәҫтиәне була. Шул уҡ ваҡытта заводҡа руда ташырға, урман киҫергә, продукцияны пристандәргә алып барырға башҡорттарҙы яллайҙар. Сөнки урыҫ крәҫтиәндәре башҡорт ерҙәре буйлап иркен йөрөргә йәки урман-ҡырға сығып эшләргә ҡурҡа. Ғәжәп, әммә бына ошо сараһыҙҙан килеп тыуған аралашыу төрлө милләттән һәм төрлө диндән булған халыҡтарҙы берләштереп, хатта теләктәш итеп тә ҡуя. Заводтар крепостнойҙарынан тыш, ирекле халыҡты ла эшкә йәлеп итеп, уларға кредит формаһында бурысҡа биреп, яйлап уларҙы ошо бурыстары менән үҙенә бәйләй. Һәм торабара башҡортҡа ла, урыҫҡа ла, марийға ла, сыуашҡа ла дөйөм бер иҙеүсе дошман сүрәтенә инә. Артабан ихтилалдарҙа ла, граждандар һуғышында ла төрлө милләттәрҙең берләшеп күтәрелеүе тап ана шул заводтар төҙөлөү барышында баш алған үҙ-ара интеграция күренеше ул.

Башҡорт яуҙары гел генә уңышһыҙ тамамланһа ла, колонизаторҙар баҫып алған ерҙәрендә үҙҙәрен тыныс тоя алмаған. Шуға күрә, күпләп ҡәлғә төҙөүҙән тыш, улар һәр урыҫ ҡалаһын, заводын, ауылын ысын хәрби нығытмаға әйләндергән: текә уалдар, тәрән урҙар (тәрән итеп ҡаҙылған тар, оҙон соҡор), ныҡ ҡоймалар менән уратҡан һәм атыр туптарын, ҡорал-ярағын, дары-яһағын һәр ваҡыт әҙер тотҡан. Башҡорттарҙа колонизаторҙарҙы ҡурҡытырлыҡ көс һаман да булған әле. Шул ҡурҡыныстан ҡотолоу, "элекке болаларҙың ҡабатланыу мөмкинлеген мәңгегә бөтөрөү", башҡорттоң ҡеүәтенең тамырын ҡоротоу маҡсатында батша етәкселегендәге махсус комитет башҡорт ерҙәрен Рәсәй ҡарамағына юридик рәүештә нығытып, күсерергә, ә уның өсөн заводсыларҙың баҫып алғанын мәңгелеккә "үҙ ирке менән биргән" йәки "һатҡан" тигән ҡағыҙ менән һаҡларға ҡарар иткән. Ерҙе күрәләтә талағандар. Миҫал өсөн алғанда, Салауат яуына тиклем башҡорт еренең 3 766 659 дисәтинәһе (десәтинә - 1,09 га; тимәк, 4 106 000 гектар) заводтарға күскән, шуның күпселек өлөшө 50-55-се йылдарҙан һуң баҫып алынған. 2 429 547 дисәтинәһен алпауыттар (помещиктар) ҡулға эләктергән. Унан тыш, 4 138 881 дисәтинә ер ҡәлғәләргә (крепостарға) тартып алынған. Башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙа килмешәктәр ҙә ҙур тырышлыҡ күрһәткән. Шулай итеп, башҡорттар иң мөһим, хужалыҡ өсөн иң кәрәкле ерҙәрен юғалтҡан. Шул арҡала бик ауыр иҡтисади хәлгә ҡалған. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тип аталған оло яу алдынан башҡорттоң хәле бына шулай булған.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**


**(Дауамы. Башы 43-сө һанда).**


*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Гәрәйҙәр

Гәрәйҙәр тарихы кирәйҙәр һәм ҡуңғыраттар менән бәйле булған Дәште Ҡыпсаҡ дәүләтенә барып ялғана. Гәрәйҙәрҙең яңы моронлаған

Сыңғыҙхан империяһына ҡаршы торорлоҡ традициялары, дәүләтселеге була. XI быуат аҙағына караиттар шундай ҡеүәткә өлгәшә: уларҙың хакимы - Ванхандың улы барлыҡ төньяҡ ҡәбиләләләрҙең башлығы булып китә. Ул Сыңғыҙхандың туғаны була. Әммә тормош шулай килеп сыға: Сыңғыҙхан еңеүгә өлгәшә. 1203 йылда Ванхандың союзнигы булған Тоғрул менән Сыңғыҙхан араһында һуғыш сыға, унда Сыңғыҙхан саҡ-саҡ ҡыйралмай ҡала. Күпмелер ваҡыттан һуң Сыңғыҙхан яугирҙары караиттарға һөжүм яһап, ханлыҡты һәләкәткә дусар итә. В.В. Востров һәм М.С. Моҡанов фекеренсә, караиттарҙың бер өлөшө төньяҡ-көнбайышҡа күсенеп өлгөрә. Иртыштың түбәненә ҡарай хәрәкәт итеп, улар хәҙерге Ҡаҙағстанға килеп сыға.

Караиттар Алтын Урҙаға тиклем үк барлыҡҡа килгән дәүләт һаналған, Ҡытай менән сиктәш торған. Улар 1202 йылда монголдар тарафынан тармар ителә, ҡалғандары XIII-XIV быуаттарҙа Урал алдына күсенеп килә. Ғалимдар башҡорттарҙың гәрәй ырыуын ("кәрә" тамыры) караиттар менән бәйләй. Танылған монголоид Л.Л.Викторова шулай яҙа: "Караиттар төрки уйғырҙарҙан һәм ҡидан-монголдарҙан торған ҡатнаш составты тәшкил иткән..." Караиттарҙың төрки сығышлы булыуы хаҡында Г. Хворс һ.б. яҙа. Ҡайһы бер ғалимдар уларҙы төрки ҡәбиләләргә индерә.

Гәрәйҙәр төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының иң эре ҡәбиләләренең береһе. Элек был ҡәбилә ике өлөшкә бүленгән: урман гәрәйҙәр һәм гәрәйҙәр иле. Башҡорт ғалимдары гәрәйҙәрҙең кирәй ҡыпсаҡтар менән туғандаш булыуын асыҡлаған. Гәрәй башҡорт ҡәбиләһенең мең йылдан ашыу тарихы бар. Гәрәйҙең риүәйәттәре буйынса, Гәрә баба ҡыпсаҡтар менән бергә XIV-XV быуаттарҙа Волга буйын биләгән. Гәрәй ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшө төньяҡ-көнбайыш йүнәлештә Танып йылғаһының ҡушылдыҡтарына йүнәлеп, урман гәрәйҙәрен хасил итә.

Ағиҙел йылғаһының түбәнендә гәрәй-ҡыпсаҡтарҙың ҙур өлөшө йәнәйҙәрҙе йота.

Гәрә, гәрәй, кирәй этнонимдары Ҡырым татарҙары, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, үзбәктәр араһында күп осрай. Был ҡәбиләләрҙең тарихы башҡорт ғалимдары Ю.М. Йосопов, Р.Р. Аҫылғужин тарафынан ентекле өйрәнелеп, гәрәйҙәрҙең 8 вариант шәжәрәһе асыҡланған. Уларҙың береһендә ҡәбиләгә исем биреүсе Гәрәй хан телгә алына. Гәрәйҙәр башҡорт халҡының айырылғыһыҙ өлөшө һанала.


**(Дауамы бар).**

*Ғөмүмән, етмеш йыл буйына халҡыбыҙ бөтә нәмәне фәҡәт тиҫкәре килеш күреп йөрөгән икән. "Октябрь түңкәрелеше" тип атауҙары бик тә дөрөҫкә тура килә һымаҡ.*



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҠАЙҺЫ ЗАМАН ЯҠШЫРАҠ,

## йәки Октябрь революцияһының 100 йыллығы айҡанлы уйланыуҙар

(Башы 3-сө биттә).

Нисек кенә булмаһын, үҙ заманында бындай йырҙарҙы ифрат яратып тыңлайбыҙ. Ул саҡта радио ауылдағы уҡытыусы ағайҙарҙа ғына бар ине. Ә бер-ике ғаиләлә пластинкаһы әйләнеп йырлай торған патефон була торғайны. Шуларға йыр тыңларға йөрөйбөҙ. Бәхеткә, өй хужалары беҙҙе ҡыумай. Һәр бер өйҙә үҙ тиҫтереңде табырға була, сөнки һәммә кешенең ғаиләһендә тиерлек кәмендә биш-алты бала бар. Уйнарға барған кеше булып, йыр тыңлап рәхәтләнәбеҙ. Телевизор тигән нәмә тураһында, әлбиттә, ул саҡта хатта хыялланмайбыҙ ҙа, тиер инем, әммә фәлән малай ҡалала йәшәгән туғандарына ҡунаҡҡа барып ҡайтҡас, "тилвизур" тип аталған күрһәткес йәшниктән кино ҡарағаны хаҡында һөйләгәнен ишетәбеҙ. Уның "шыттырыуына" ышанмаған кеше булабыҙ, әммә үҙебеҙ был турала хыял итә башлайбыҙ. Шул осорҙарҙа Демократик Германияла хәрби хеҙмәттә булып ҡайтҡан ҡайһы бер ағайҙар "ниместәр төҫлө телевизор ҡарай", тип аптырата. Кеше ышанмаҫ нәмәне һөйләмәһәләр ҙә булыр ине. Нисек инде һуғышта беҙҙең атайҙар пыран-заран килтергән немецтарҙа ундай нәмәнең булыуы мөмкин!..

Ауылда йәштәр концерт ҡуйғанда "Һауынсылар бейеүе"н бейегәндәре хәтеремдә. Матур-матур апайҙарыбыҙ, ап-аҡ халаттар кейеп, иңбаштары аша таҫтамалдар һалып, ҡулдарына биҙрәләр тотоп, теҙелешеп, һамаҡлай-һамаҡлай бейейҙәр:

*...Америка Штаттарын*
*Ҡыуып етербеҙ әле.*
*Ҡыуып етеп, уҙып китеп*
*Ҡыҙыҡ итербеҙ әле...*

Ябай ауыл малайының күңелендә тағы сираттағы аңлашылмаған һорауҙар килеп тыуа: нисек инде - "ҡыуып етербеҙ"? Ҡулдары бығаулы көйө, бай хужаларынан туҡмала-туҡмала эшләп, һуҡа менән ер һөрөп йөрөгән американдарҙы һаман да ҡыуып етмәгәнбеҙме икән ни? Уларҙың хатта беҙҙәге һымаҡ алдынғы миллионер колхоз-совхоздары ла юҡ бит! Был хаҡта улар хыяллана ла алмай, сөнки уларҙың хөкүмәт башында беҙҙең теге элекке Николай батша һымаҡ "брзидинт" ултыра... Американан артта ҡалғаныбыҙға һис тә ышанғы килмәй, честное, пионерское! Әйткәндәй, пионер ойошмаһына инергә барғанда тулҡынлана-тулҡынлана ант биреүем хәтеремдә. Пионерға алыусы комиссияла ултырған дружина командиры герой-пионерҙарҙы исемләп әйтеп сығырға ҡуша. Һанап китәм: "...Володя Дубинин, Петя Клыпа, Кычан Джакыпов, Павлик Морозов..." "Иген йәшереп алып ҡалды", тип, властарға хатта үҙ олатаһын тотторop, иҫ китерлек батырлыҡ күрһәтеп һәләк булған Павлик Морозовтан көнләшәбеҙ...

Бына шундай рухта үҫә килеп, ир еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. 1979 йылда Совет ғәскәрҙәрен Афғанстанға индергән мәлдә мин оҙайлы әрме хеҙмәтен әле генә башлаған инем. Илебеҙҙең ялҡынлы патриоттары, коммунист булараҡ, күп кенә офицерҙарыбыҙ үҙ теләге менән "демократик бурысты" үтәү ниәтен белгертеп, юғары командованиеға рапорт яҙа. Улар рәтенә минҙә инергә тура килмәй, беҙҙе - стратегик ракета ғәскәрҙәре сафындағыларҙы (ул саҡта бик ныҡ "секретный" частар булғанға), унда алмайҙар. Мин шулай ҙа Коммунистар партияһына инергә ғариза яҙам, сөнки коммунист булмаһаң, әрмелә хәрби звание буйынса үҫеү мөмкин түгел тиерлек. Егеттәр Афғанстандан цинк табутында күпләп кире ҡайта башлағас, бәғзеләрҙең унда һуғышҡа барыу теләктәре бер аҙ һүрелә төшә. Ә шулай ҙа был дәүерҙә халыҡ үҙ әрмеһенә ифрат та яҡшы ҡарашта булды. Хәрби формалағы кешенең почет хәтәр! Кеҫә лә әллә ни таҡыр түгел, тик магазинда теләгән әйберенде табыу ғына ҡатмарлыраҡ. Бер күнеккәс, быға ла ул хәтлем үк иғтибар итмәйбеҙ. Үҙебеҙ яҡынайтырға тырышып ятҡан яҡты киләсәкте - коммунизмды көтәбеҙ. Беҙ күрмәһәк, уны беҙҙең улдарыбыҙ, йәиһә ейәндәребеҙ барыбыр күрәсәк бит...




### Асыҡлыҡ, демократия, үҙгәртеп ҡороу...

Байтаҡ ваҡыт "торғонлоҡ" дәүерендә йәшәгән икәнлегебеҙҙе тик һикһәненсе йылдар аҙағында ғына белдек. Алға, коммунизмға китеп барабыҙ, тип хис итеп, үҙебеҙ бер урында тапанып тик торғанбыҙ ҙа баһа! Ошо хаҡта әле генә власҡа килгән яңы, йәш генераль сәркәтиптең иғлан итеүе "ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡан" һымаҡ булды. Һәр ерҙә йыйын, митингылар. Асыҡлыҡ. Кем нимә теләй - шуны һөйләй, кем кемде теләй, шуны - тәнҡитләй. Әрмегә лә килеп тотондолар. Беҙҙе, йәғни, хәрбиҙәрҙе - "әрәмтамаҡтар"ҙы халыҡ юҡҡа ғына ашатып торған икән ошоғаса! Хәҙер илгә донъя империализмы хәүеф менән янамай. Киреһенсә, илдәге барлыҡ аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һоро шинелле "әреғорттарға" китеп тора икән, шунлыҡтан, беҙ ярлы йәшәйбеҙ... Ҡала урамдарына хәрби кейемдә сығыуы ла хәүефле була башланы. Йә унда, йә бында хәрбиҙәрҙе туҡмау осраҡтары хаҡында ла мәғлүмәттәр ишетелгеләй...

Частарҙа ла үҙгәртеп ҡороу башланды. Боронғо батша заманында булған "Офицерское собрание" тигән нәмә ҡабаттан терелде. Демократия "балаһы" булған ана шундай йыйылыштарҙа хатта командирҙарҙы тәнҡитләү ҙә рөхсәт ителә. Әммә... "собрание"нан сығыуың була, шунда уҡ һине командир үҙенең кабинетына саҡыртып ала, әңгәмәгә...

Генераль сәркәтиптең илдәге эскелеккә ҡаршы аяуһыҙ көрәш башлауы күптәрҙе ҡанатландыра. "Ҡоро закон" сәйәсәте ҙур ғына өмөт уята. Әммә ҡәһәрле шайтандың әҙәм балаларын бик тиҙ генә арала "сәмәй" тип аталған эсемлек яһарға өйрәтеүе ҡабаттан "ҡанаттарҙы ҡайыра"...

Элегерәк совет ҡоролошон, Коммунистар партияһының тоғро юлын данлауҙан бушамаған барлыҡ тиерлек гәзит-журналдар хәҙер ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән тулы. Хатта ил башлыҡтарын тәнҡитләүҙән, улар хаҡында һәр төрлө көләмәстәр яҙыуҙан да тартынмайҙар. Телевидение тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Оҙаҡламай батшаны төшөрөүҙең дә, аҡтарға ҡаршы көрәштең дә кәрәк булмағанын аңланыҡ. Колхозлашыу ҙа дөрөҫ булмаған. Кулактарҙы ла Себергә һөрмәҫкә кәрәк булған икән. Зәки Вәлидиҙең халҡыбыҙҙың данлыҡлы улы, тәүге башҡорт профессоры, Башҡорт автономияһының, Рәсәй федерализмының атаһы булғанын да шул осорҙа ғына белдек. Әйтерһең, беҙҙең оло ағайҙарыбыҙ уның хаҡында ошоғаса һис бер нәмә белмәгән, ә дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе әле генә осраҡлы табып алғандар... Миллионлаған кешеләр бөйөкләп данлаған "беҙгә бәхет биргән" Ленин бабайҙың юлы бөтөнләйгә дөрөҫ булмаған бит, ауыҙына май булғыры! Мин Коммунистар партияһына ун йыл тирәһе ай һайын офицерҙың эш хаҡынан юҡҡа ғына иғәнә түләп йөрөгәнмен (һанап ҡараһам - ярты машиналыҡ аҡса киткән). Советтар Союзы исемле бөйөк ил төҙөү ҙә хатта кәрәк булмаған. Һәр республика үҙаллы булған осраҡта ғына ирекле һәм уның халҡы бәхетле була икәне хаҡында ла белмәй йәшәгәнбеҙ...

Ана шул йылдарҙа атайым үлем түшәгенә ятҡас, часҡа телеграмма һуғып, туғандарым мине өйгә саҡыртып алды. Инде һикһәненсе тиҫтәһен ҡыуып барған атайым да ошо "үҙгәртеп ҡороуҙарҙан" тамам шаңҡығайны. Ғүмер буйы (ул Октябрь революцияһынан бер йыл алдараҡ ҡына донъяға килгән) аңына һеңеп килгән нәмәләрҙе бер-ике йылда бөтөнләйгә һүтеп ташлап, тап кире юҫыҡҡа бороп ҡуйһындар әле... Әммә уға, дин тотҡан кешегә, бер нәмә оҡшап ҡалған: "Улым, анау шкаф артында ҡыҫтырылып ҡуйылған "Совет Башҡортостаны" гәзитен алып уҡы әле", - тине хәлһеҙ күҙҙәрен көскә асып. Мин гәзиттә үҙ ғүмеремдә беренсе мәртәбә дин хаҡында ыңғай мәҡәлә күрҙем. Үҙ күҙҙәремә үҙем ышанмай тиерлек, ҡабат-ҡабат уҡып сыҡтым. "Ана бит, - тине атайым, - "Алла бар", тип яҙғандар. Боронғолар бушты һөйләмәгән, тип әйтә торғайным бит һеҙгә..."

Атайымды ерләгәс, бер-ике айҙан һуң, әкренләп, намаҙ уҡый һәм дин фәнен һәр яҡлап өйрәнә башланым. Алланы таныуҙың, Уның бойороҡтарын үтәп йәшәүҙең бар кешеләр өсөн мотлаҡлығы хаҡында белдем. Шәриғәт закондарын өйрәнә башлау менән үҙем өсөн күп кенә нәмәләр астым. Мәҫәлән, Ислам дине һис тә ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеү яғында булмағанын аңланым. Динебеҙ ҡанундарына ярашлы, ҡыҙҙарҙың ризалығын алмай тороп, уларҙы кейәүгә биреү ҙә һис ярамай икән!..

Сит яҡта йөрөүемә ҡарамаҫтан, Башҡортостаным хаҡында ла һәр саҡ хәбәрҙар булырға тырышам. Республикабыҙ халҡы үҙаллылыҡ яулай икән, тип ишеткәс, шатлығым эсемә һыймай. Республикабыҙҙы урыҫ телендә лә "Башкирия" тип түгел, ә "Башкортостан" тип атай башлауҙары минең өсөн оло ҡыуаныс булды. Ана шул осорҙарҙа сираттағы отпускыға ҡайтҡан мәлемдә гәзиттә Рәүф Насыровтың "Ҡайҙан һин, Матросов?" исемле мәҡәләһен уҡып шатланғайным. Александр Матросов - Шакирйән Мәхәмәтйәнов исемле Учалы егете булған бит! Шул гәзитте часҡа алып барып, хеҙмәттәштәремә уҡып ғәжәпләндерҙем. Күптәр Матросовтың, ысынында иһә, башҡорт егете булғанына ышанманы, хатта бәғзе милләттәштәр ҙә...

Бер аҙҙан Афғанстанға ла ғәскәр индерергә кәрәк булмаған, ун меңдән ашыу һалдат ғүмере бушҡа әрәм булған икәне хаҡында белдек. Ул ғына ла түгел, беҙ, совет һалдаттары, сит илде баҫып алған "агрессорҙар" булғанбыҙ, әстәғәфируллаһ!

Ваҡиғаларҙы һөйләй башлаһаң, кемдер әйтмешләй, концакрайы юҡ. Ғөмүмән, етмеш йыл буйына халҡыбыҙ бөтә нәмәне фәҡәт тиҫкәре килеш күреп йөрөгән икән. "Октябрь түңкәрелеше" тип атауҙары бик тә дөрөҫкә тура килә һымаҡ. Бар ыңғай нәмәне баштүбән, ә һәммә баштүбәнде - ыңғай итеп күреп, әллә күпме ғүмер кисереп ташлағанбыҙ. Шул етмеш йыл эсендәге ҡоролоштоң ыңғай яҡтары ла бар, тип фаразлай күптәр. Халыҡҡа бушлай медицина ярҙамдары, мәктәптәрҙә һәм вуздарҙа түләүһеҙ уҡытыу, барса ил кешеләрен хеҙмәткә ылыҡтырыу, совет халҡының фашист Германияһын тар-мар итеүендә Коммунистар партияһының ҙур роль уйнауы... Бында ла хаҡлыҡ барҙыр. Тик "Бөйөк Ватан һуғышы" тип ҡаныбыҙға һеңешкән төшөнсәне ҡайһы бер киң мәғлүмәт сараларында хәҙер "Икенсе Бөтә донъя һуғышы" тип кенә атау менән сикләнеүҙәренә күнегеп бөтә алмайым. Былай атау ҙа, әлбиттә, дөрөҫ һәм уға әллә ни иғтибар итмәгәндә лә булыр ине, әммә иғтибар ителә бит әле, йәмәғәт...

### "Үҙгәртеп ҡороу"ҙан бер аҙ арынғас...

Кемдәрҙеңдер артынан эйәреп, тик унға ғына, йәиһә фәҡәт һулға бара-бара, халҡым хәҙер бер аҙ тынысланған да һымаҡ. Әллә арығанмы икән... Әммә, бер нәмәгә лә ҡарамаҫтан, эш кешеһе һаман эш менән булыша, матур йәшәү өсөн тырыша. Әйткәндәй, ауылдарҙа элекке колхоз-совхоздар бөтөрөлһә лә, ҡасандыр "кулак" тип илдән һөрөлгән бәғзе эшсән кешеләрҙең ейәндәре һәм бүләләренең шәхси хужалыҡ төҙөп, айырыуса етеш йәшәүҙәре күҙәтелә... Балаларға һәм үҫмерҙәргә патриотик тәрбиә биреүҙе ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыу өҫтөндә эш бара. Әммә шуның менән параллель рәүештә телевизорҙа һәр төрлө юҡ-барға реклама яһауҙан бушамайҙар. Илебеҙҙә һәм сит илдәрҙә ҡылынған һәр төрлө енәйәттәр хаҡында ла артыҡ күп һөйләйҙәр һымаҡ... Унда-бында һуғыш-маҙар сыҡҡылап тора. Болаларҙа ҡатнашыуҙан берәүҙең дә ҡоро ҡалғыһы килмәй. Ғүмер буйы беҙҙең менән берлектә йәшәгән, ҡасандыр хатта яҡын дуҫтар булған "хахул"дар ҙа ҡаңғырышып ята. Нимә етешмәй кешеләргә? Тыныс йәшәүгә ни етә! Үҙгәртеп ҡороу заманында "нәжескә буяп" насарлаған әрмебеҙҙең абруйын ҡайтанан аяҡҡа баҫтырмаҡсылар. Сәйер, әммә илде кемдәрҙәндер һаҡлау кәрәк нәмә булған икән дәбаһа... Бөтә донъя буйлап "көрсөк" тигән шәүлә йөрөй. Ауыл һайын тиерлек мәсеттәр ҡалҡып сыҡты, күп кенә яҡташтарыбыҙҙың иманға йөҙ бороуы һөйөндөрә. Шул уҡ ваҡытта, бәғзе иман йорттарында имамдарҙың яңғыҙ ғына ултырыуы, йәғни был мәсеттәрҙең әлегә һис файҙаһыҙға тиерлек тороуы эсте бошора. Илебеҙ әле капитализм стадияһына кире ҡайттымы, әллә һаман да социализмдан айырыла алмаймы икәнен мин шәхсән белеп етмәйем. Әммә һәр төрлө яҡшы яҡтары һәм етешһеҙлектәре булған хәҙерге ҡоролош, дөйөм алғанда, минең күңелгә хуш килгәндәй. Нишләптер бер юлдан ғына барғы килә, йәмәғәт... Дөрөҫөн генә әйткәндә, минең хәҙер унға ла, һулға ла киткем килмәй, Аллаһ илсеһе Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм бәйғәмбәребеҙ өйрәткән иң тура юлды һайланым. Хәҙер, әлхәмдүлилләһ, илебеҙҙә дин тыйылмай. Балаларыбыҙҙың да, ҡайһы һөнәр эйәләре булыуҙарына һәм артабан ниндәй генә ҡоролошта йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, хөкүмәтебеҙ сығарған закондарҙы тыңлап ҡына, фәҡәт бына ошо юл менән барыуҙарын теләйем. Был донъяны нисек кенә үҙгәртеп ҡороуҙарына ҡарамаҫтан, хәҡиҡәт - берәү, һәм ул һис бер ваҡытта ла үҙгәрмәйәсәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

**"Осаһыңмы, әсәй? Ә мин - осам..." Студент йылдарында сәхнәнән әсәле-ҡыҙлы ошо шиғырҙы уҡығайны улар. Шунан һуң уның тормошо менең өсөн, ысынлап та, тормош ығы-зығыһына иғтибар бирмәй, гел үргә, гел бейеккә, гел яҡтылыҡҡа, зәңгәр күккә һәм сағыу ҡояшҡа табан осош кеүек ҡуҙалланды. Юҡ, ҡояшҡа уҡталғанда ла ҡанаттары янмаһа уның, киреһенсә, рухы ныҡһынды. "Өфө башҡорто" рубрикаһының сираттағы ҡунағы кем тиһегеҙме? БР Матбуғат буйынса агентлыҡтың баш белгес-эксперты, БР һәм РФ Журналистар союзы ағзаһы, "Башҡортостан ҡыҙы", "Рампа", "Тамаша" журналдары, "Истоки" гәзитенең редколлегия ағзаһы Неля ҒӘЙНЕТДИНОВА.**

# ИКЕ ТЕЛДЕ БЕЛЕҮЕМ ҺӘМ...

## баш ҡалала йәшәүем менән бәхетлемен



**➔ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙенең бер шиғырында: "Ауыр икән башҡорт булыуҙары..." тип яҙғайны. Һеҙҙең өсөн Өфөлә башҡорт булыуы ауырмы? Башҡорт булған өсөн генә ниндәйҙер ҡаршылыҡ, ауырлыҡ тояһығыҙмы? Айырып ҡарау бармы?**

- Үҙемә килгәндә, башҡорт әҙәбиәте классигының был һүҙҙәрен бер аҙ үҙгәртеп, "ауыр түгел башҡорт булыуҙары, ауыр түгел, әммә яуаплы", тиер инем. Ни өсөнмө? Сөнки... Әгәр үҙеңде был донъяла башҡорт милләтенең бер вәкиле итеп күрһәтәһең икән, иненә ҙур яуаплылыҡ алаһың, башҡалар һинең әйткән һүҙҙәреoriginalң, ҡылған ғәмәлдәрең, эшләгән эштәрең, ҡорған ғаиләң, үстергән балаларың буйынса ғына түгел, тышҡы ҡиәфәтең буйынса ла башҡорттар тураһында һығымта яһай. Тотошлай булмаһа ла, һин ошо фекер халҡың рухына, уның донъяға ҡарашына тап килһен өсөн ҡулыңдан килгәнде эшләй - милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлауға һәм үстереүгә ярҙам итә, уның иң яҡшы өлгөләрен күрһәтә алаһың.

Сит илдәрҙә булғанда урындағы халыҡ һәр саҡ ниндәй милләттән булыуымды һораша. "Башҡорт", тиһәм, ҡайһы ҡаланан, уның ҡайҙа урынлашыуы, ниндәй иҫтәлекле урындары булыуы, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, милли байрамдар, башҡорт аш-һыуы менән ҡыҙыҡһына башлайҙар. Яңы таныштарымдың Рәсәй тураһындағы ярым-ярты белеменән күп милләтле илдең тап йөрәгендә йәшәгән башҡорттар тураһында дөйөм картина барлыҡҡа килә. Уларҙың күңелендә ҡалдырған образ өсөн, әлбиттә, мин яуаплы.

Өфө менең өсөн тәбиғи йәшәү урыны һәм мин ошо ҡала йәшәүем менән бәхетле, уны бер ниндәй арттырыу-шаштырыуһыҙ Ер йөҙөндәге иң яҡшы ҡала тип иҫәпләйем. Тормошта һәр кемгә ауырлыҡтар аша үтергә тура килә, әммә мин башҡорт булғаным өсөн түгел. Башҡорт булғаным өсөн генә алдыма ҡуйған маҡсаттарымды тормошҡа ашырыуҙа бер ниндәй кәртә лә тойманым. Ике телде, мәҙәниәтте, әҙәбиәтте, мосолмандарҙың һәм христиандарҙың йолаларын белеү, уларҙы анлау һәм ҡабул итеү - миңә үҙемде һөнәри эшмәкәрлектә тулыһынса асырға, шулай уҡ донъяның күп төрлөлөгөн һәм уның төрлө төҫтә булыуын тойорға ярҙам итте һәм итә.

**➔ Ҡайһы мәктәптә белем алдығыҙ, уҡыу йылдары ни ягы менән хәтерегеҙҙә ҡалды? Бөтөн нәмә ғаиләләге тәрбиәнән килә, тиҙәр. Башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡый инегеҙме, ғаиләлә башҡортса һөйләштегеҙме?**

- Мин Өфөнөң 49-сы ябай совет мәктәбендә белем алдым. Үкенескә күрә, ул йылдарҙа беҙҙең мәктәптә бер генә сәғәт тә башҡорт теле уҡытылманы. Уҡытыусылар көслө, уҡыусыларға талаптар юғары булды. Мин бигерәк тә әҙәбиәтте - рус әҙәбиәтен яраттым. Әгәр Лев Толстойҙың ҡатыны иренең "Война и мир" романын ете тапҡыр ҡулдан күсереп яҙһа, мин уны ете тапҡыр уҡып сыҡтым. Мәктәп йылдарында Достоевскийҙың, Чеховтың, Тургеневтың, Пушкиндың, Лермонтовтың әҫәрҙәре йыйынтыҡтарын уҡыным, "Роман-газета", "Юность", "Огонек" журналдарын һәм башҡа төрлө әҙәбиәтте энәһенән ебенәсә уҡый инем. Әсәйем хатта өйгә китапхананы тулыландырып өлгөрмәһә, ҡала китапханаларының уҡыу залдарында китапҡа "сумдым", әхирәттәрем менән китаптар алмаштым, сираттағы дефицит китапты алып уҡыр өсөн макулатура тапшырҙым. Ә инде дингеҙгә барһаҡ, урындағы китапханаларҙың барлыҡ ассортиментын уҡып сыға, хатта пляжда ла китаптан айырылмай инем. Бала сағым бына шундай булды.

Уҙған быуаттың 70-80-се йылдарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, нигеҙҙә, ғаиләлә өйрәнелде. Каникулдар ауылда үтте. Олатай-өләсәйемә телде өйрәткәндәре өсөн әле лә рәхмәтлемен. Өләсәйем мине башҡортса, ғәрәпсә яҙырға өйрәтте, хаттарҙы башҡортса яҙыша инек, ул шулай итеп башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныуымды төрләсә хупларға тырышты. Уларҙан миңә башҡорттарға ҡағылышлы бөтөн нәмәгә - ғөрөф-ғәҙәттәргә, тәрбиәгә, әсәйемдән башҡорт әҙәбиәтенә, мәғлүмәтте насар-яҡшыға айыра белеүгә, аралашыуға һөйөү күскән.

Өйөбөҙҙә авторҙарҙың автографтары ҡуйылған китаптар һаҡланды, шуға ла рус классиктары менән бер рәттән, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Кәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев, Ғәлим Хисамов, Рәшит Солтангәрәев, Фәкиһә Туғыҙбаева, Таңһылыу Ҡарамышыева һәм әсәйемдең башҡа бик күп дуҫтары, арҡаҙаш яҙыусыларының китаптарын ҡабат-ҡабат уҡыным. Улар беҙгә бик йыш ҡунаҡҡа килә, бергәләп сәй эсәләр, аш бүлмәһендә яңы, әле бер ҡайҙа ла баҫылмаған шиғырҙарын, проза әҫәрҙәре өҙөктәрен бер-береһенә уҡыйҙар ине. Йәш яҙыусылар, минең тиңдәштәрем дә әсәйемә тартылды, ул йәштәр менән дә белемен һәм тәжрибәһен кинәнеп бүлеште. Мин ҡәләмдәш дуҫтарымдың ижады баһаланғанда тыңлаусы булып ҡына ултырманым, ә фекер алышыуҙарҙа, бәхәстәрҙә лә ҡатнашып, үҙ һүҙемде әйтә инем. Шуға күрә, башҡорт шиғриәтенә, әҙәбиәтенә һөйөү миңә әсә һөтө менән күскән, тип әйтә алам.

**➔ Бөгөн башҡорт телен дәүләт теле буларак уҡытыу буйынса төрлө бәхәстәр бара, һеҙҙең өсөн башҡорт теле ниндәй әһәмиәткә эйә?**

- Русса уйлап, русса аралашып, русса яҙһам да, әгәр башҡорт телен белмәһәм, мине уратып алған кешеләрҙең әһәмиәтен һәм мөһимлеген, уларҙың бөтөн ғүмерен нимәгә арнағанын баһалай алыр инемме ни? Миңә туған тел һулар һауа кеүек кәрәк, уның аша мин халҡымдың күңелен аңлайым, ул - минең милләтемде билдәләүсе, миңә йәшәү һуты биреп торған тамыр. Шуға күрә һәр ғаиләлә телде өйрәнеү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылырға, ә белем биреү системаһы быға ярҙам итергә тейеш, тип уйлайым.

Был йәһәттән, әлеге ваҡытта хеҙмәт вазифам буйынса китап баҫтырыу, уларҙы таратыу мәсьәләләре буйынса кураторламын, республика халыҡтары телдәрендә ижад итеүселәрҙең китаптарын сығарырға ярҙам итәм. Бөгөн республикала китап баҫтырыу өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙа кәрәкле хоҡуҡи-норматив база бар, башҡорт, рус, инглиз, немец, француз телдәрендә "Урал батыр" эпосын сығарыу кеүек әһәмиәтле проекттар тормошҡа ашырыла, башҡорт лексикографияһы тарихында беренсе тапҡыр "Башҡорт теленең академик һүҙлеге" аңлатмалы-тәржемә һүҙлегенең 10 томлығы нәшер итеlә башланы һәм дауам итә, электрон китаптар сығарыла, мультимедиа проекттары тормошҡа ашырыла һ.б. Һуңғы йылдарҙа Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә башҡорт, рус, инглиз телендә параллель текстар бирелгән балалар өсөн китаптар сығарыу эше киң йәйелдерелде, улар бәләкәстәргә төрлө телдәр аша мәғжизәле донъяға инеү мөмкинлеген бирә. Әле төбәк брендтарына арналған русса-инглизсә-башҡортса һөйләшеү өсөн ҡулланма сығарырға әҙерләйбеҙ.

**➔ Әсәйегеҙ - рухлы башҡорт яҙыусыһы Тамара Ғәниева. Билдәле шәхес ҡыҙы булыу - ул ҙур яуаплылыҡ та. Ошо яуаплылыҡты тойҙоғоҙмо, уны аҡларға тырыштығыҙмы, әллә тормошта барыһы ла еңел бирелдеме?**

- Миңә бындай һорауҙы бик йыш бирәләр. Моғайын, билдәле шағирә ғаиләһендә тыуғанға тормошта бәхетле билет тартып алғанмын кеүек тойолалыр. Әммә ышанысығыҙҙы аҡламаҫмын, моғайын, сөнки әсәйем Тамара Ғәниева булып киткәнсе ярты быуат ауыр ижади юл үтте һәм мин һәр саҡ уның эргәһендә булдым. Беҙгә бер нәмә лә еңел бирелмәне, ҙур ҡалала үҙ урыныңды табыу өсөн көрәшергә, үҙеңде бары тик ныҡышмал һәм фиҙакәр хеҙмәт аша ғына раҫларға мөмкин. Әсәйем ғүмер буйы башҡорт журналистикаһына, башҡорт әҙәбиәтенә хеҙмәт итте, хәҙер уның юлын мин дауам итәм. Һөнәрем - журналист. 30 йыл самаһы республиканың киң мәғлүмәт сараларында эшләйем: телевидениела, радиола, матбуғатта, Башҡортостан Республикаһының дәүләт граждан хеҙмәтендә. Ошо ваҡыт эсендә һәр саҡ күңелемдә һүҙгә, мәғлүмәткә һөйөү йөрөтәм.

**➔ Тыуған ерҙән торған ер яҡшы, тиҙәр. Ҡалала иң яратҡан урынығыҙ? Мөмкинлегегеҙ булһа, нимәне үҙгәртер инегеҙ?**

- Өфөнө ныҡ яратам, әммә иң яратҡан урындарым, әлбиттә - "Башҡортостан" сауҙа үҙәгенән Урмансылар паркына тиклемге ара. Ул ер бала саҡта уҡ арҡырыһынан буйына йөрөп сығылған. Телеүҙәк районы - йәшлегем үткән урын, уның да барлыҡ урамдарын йәйәү үтелде. Ленин урамында йөрөргә, "Ете ҡыҙ" фонтаны майҙанында ултырырға, Президент-отель эргәһендәге ҡарағай урманында йөрөргә яратам. Бөтөн урындарҙы һанап бөтөп тә булмай. Үкенескә күрә, баш ҡала тормошо ритмы йәйәүләп йөрөү мөмкинлеген ҡалдырмай һәм Өфөнөң матурлығын йышыраҡ машина тәҙрәһе аша ғына күҙәтергә тура килә.

**➔ Бөгөн ҡала мәҙәниәтендә башҡорт колориты етерлекме?**

- Милли колориттың күберәк булыуын, ҡалабыҙҙы донъяның һәр мөйөшөндә таныуҙарын һәм саф һауа теләр инем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

***✓ Әммә уның ҡанында эт рухының ҡатнашмаһы бар. Шуғалырмы, ул кешеләргә ҡарағанда эттәргә яҡыныраҡ, эт үрсетә, эт ғәме, бурҙайҙар хәстәре менән йәшәй. Тик был мал йәнле тигән һүҙ түгел әле.***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТӘҮБӘ

Хикәйә

Актрисаны таң менән ниндәйҙер иномарка килеп ала ла ул кискә ҡәҙәр ҡайҙалыр юғалып тора. Төн уртаһы ауғас ҡына теге машина коттедж ҡапҡаһы ауыҙына килеп төртөлә. Шулай булғас башҡа маҙаһыҙлаусы юҡ. Ҡарсыҡ донъяға ҡар-ауыл була алмай, уның донъяһы тар таш ҡапсыҡ менән сикләнгән. Ә теге хеҙмәтсе ир иҫәпкә бар, һанға юҡ, ихатала тауыш-тынһыҙ ҡыймылдаған шәүлә инде. Йорттоң икенсе ҡатына тағы ла берәү күсенеп килде, ул - теге, актрисаның балаһын имеҙеүсе, ҙур кәүҙәле, тирмәндәй осалы, түштәре күлдәген йыртырҙай булып бытлыҡҡан утыҙ биш йәштәр самаһындағы ҡатын. Ул тәү осрашҡанда уҡ уға оҡ-шаманы; башҡаларға түбәнһетеп мыҫҡыллап ҡарай, өҙләкһеҙ тәмәке быҫҡыта, өҫтәүенә фиғел-торошонан ниндәйҙер күҙгә бәрелеп бармаған эске әрпешлек аңҡый. Ҡатын баланы арлы-бирле имеҙә лә үҙенә тәғәйенләнгән бүлмәгә инеп карауатында аунай, йә булмаһа көндәр буйы көҙгө алдынан китмәй биҙәнә-төҙәнә. Бүлмәһен йыйыштырыу хаҡында уйлап та ҡарамай, уны икенсе берәүҙең бурысы итеп ҡарай. Тәғәйен эшкә ялланғандар икән, шуны ғына үтәй, башҡаһы уға ҡағылмай. Исмаһам ҡулына гәзит-журнал, йә берәй китап алып ҡараштырһасы. Буш ваҡытын телевизор ҡарап үткәрә, үҙе ише көндәр буйы түшәктә аунаған, йорт тәҙөйөм, тип аҙапланған булып көндәр буйы хәбәр бутҡаһы бешергән йыйын әтрәгәләмдәрҙе күҙәтә, уларға телефоны аша СМС-сәләмдәр оҙата. Бар белгәне шул.

Коттедждың коридорына инеп иҙәнде йыуа ғына башлағайны, бала мыжырға тотондо. Бер аҙҙан мыжыу илауға ялғанды. Теге ҡатын сығып күренергә лә уйламай, моғайын төнө буйы яратҡан тапшырыуын ҡараған да әле йоҡо һимертәләр. Бала ярһыған ярһый бара. Нимә эшләргә? Һыуы биҙрәһен, сепрәк беркетелгән һаплы ҡулайламаһын бер ситкә ҡуйҙы ла ары ни ҡыларға белмәй урынында тапанды. Әллә әүрәтеп ҡарарғамы? Теге йыбыҡтыға инеп әйтһә лә ул ҡымғырлап сыҡҡансы әллә күпме ваҡыт үтер. Шул мәл уның уйын ҡеүәтләгәндәй ҡарсыҡтың бүлмәһенән өҙәләнгән ҡысҡырыуы ишетелде:

- Һеҙҙең эсегеҙҙә йәнегеҙ бармы, тынысландырығыҙ шуны!

Дилемма һаҡ ҡына бүлмә ишеген асып инде, бәүелтмәле карауатҡа яҡынланы. Бала күҙҙәрен йомоп, тешһеҙ ауыҙын ҙур асып аҡыра ғына. Ипле генә үрелеп уны ҡулына алды. Бала бер мәлгә генә һағайып ҡалды ла ары теләгәнен алмағас яр һала бирҙе, бәүелтеүгә генә мөрхәтһенмәй. Нимәләр уларға йыйынғандай ян-яғына ҡарап алды, ҡабаланып күлдәк иҙеүен ысҡындырғас имсәген баланың ауыҙына ҡаптырҙы. Бала ҡомһоҙланып имергә тотондо. Уның тәненән ошоға тиклем кисермәгән илаһи ләззәт йүгереп үтте лә тотош тәнен ялманы. Әйтерһең уның кәүҙәһе тотошлайы менән уймаҡтай, йылымыс сөңгөлгә сумған да илаһи бишектә бәүелә... Бына нисегерәк икән ул бала имеҙеү! Ошоғаса татып ҡарамаған ләззәтле Хоҙай бүләге! Күҙҙәрен йомдо ла биниһая ваҡыт шулай бәүелеп, онотолоп торҙо. Көтөлмәгән, ҡырағай тауыш һиҫкәндереп ебәрҙе:

- Һеҙ нимә эшләйһегеҙ?!

Ҡайырылды һәм юғалды ла ҡалды, ишек ауыҙында баланың әсәһе тора ине. Был ваҡытта ҡайтмай торғайны ла баһа. Актриса ҡойондай өйөрөлөп килде лә балаһын тартып алды, күкрәгенә ҡыҫты, уҡтай тырпайған, яһалма керпектәрен сәнсеп, матур күҙҙәрен зәһәрләндереп үсал ыҫылданы:

- Бар сыҡ, нишләп бында индең, бурысың бит көсөктәр бағыу. Бүлмәне һаҫытма, һинән эт еҫе килә! Быҫраҡ еленеңде балаға ҡаптырҙыңмы, шаҡшы! Вон!

Бындай уҡ мыҫҡыллауҙы көтмәгәйне, мейеһенә ҡайнар ҡан бәрҙе, тәнен өшөгәндәгеләй ҡалтырау ҡалсылдатты. Ҡайтарып үсал яуаплар ине, көнө көнләктә, йәнә өҫтәүенә теле аңҡауына йәбешкән. Ул һеңгәҙәүен көскә еңеп ишек яғына тәнтерәкләне лә коридорға сыҡҡас быуынһыҙланып иҙәнгә сүкте. Күпме шулай ҡыялғандыр, күреп-күҙәтеп торған, тиерһең, ҡырыҫ ҡарсыҡ тауышы уны үҙенә саҡырҙы:

- Һиңә әйтәм, кер бында!

Инде лә көскә ҡыймылдап түргә үтте, карауат ҡырына һаҡты, йөҙөн ҡушусланы. Оҙаҡ ултырҙы онотолоп. Ҡарсыҡ та таш һындай һуҙылған, әйтерһең инеүсене абайламаған да. Бер аҙҙан ул үҙ алдына һөйләнгәндәй әйтте:

- Хоҙай Тәғәләнән ҡурҡыу бөттө хәҙер, кешене йәберләү бер ни тормай, хатта гонаһҡа ла иҫәпләнмәй. - Ул көн дә әйткән "арыным"һүҙен ҡабатланы ла йөҙөндә хәсрәт сағылдырып баяғы ҡырыҫлығында һораны:

- Теге һепертке көнтәйҙән ҡыуылып сыҡтыңмы?

- Эйе... Һеҙҙең киленегеҙҙән...

- Беләһеңме, өйҙә ни өсөн ташлап китәләр? - Көтә бирҙе лә үҙе яуап бирҙе. - Ҡотһоҙлоҡтан биҙеп, һалҡынлыҡтан ҡасып китә кеше...

- Беҙҙең өй йылы ине. - Ҡабаланып бүлдерҙе Дилемма.

- Ышанам... Ул саҡта һин үҙең йәнеңдәге һалҡынлыҡты йылытырға теләп ҡасҡанһың. Бына беҙҙең йортта ҡот юҡ, байлыҡ күп, һәм уға мәғәнә һәм ырыҫ ҡунмаған. Һап-һау йөрөгән еренән өлкән киленем беҙҙе мәңгегә ташлап китте. Һәйбәт кеше ине ул, быныһын ихластан әйтәм. Ул яман шештән ауырып йығылғас минең ише япа-яңғыҙы ҡалды. Эргәһенә инеп сығыусы ла булманы шикелле, ятты шулай һуңғы көнөнә саҡлы тотонолоуы еткән әйберҙәй. Мин ярҙамлашыр инем, күреп тораһың, түшәккә ҡаҙаҡланғанмын. Улым шул эттәр талаштырыуҙан бушамай, йә даими эскелеккә һабыша. Ейәнем бизнес һылтауы менән ситтә аҙып йөрөй, бынау килен ишараты бәхетте ҡыҫыр ялтырауыҡтан эҙләй, кем етте шуның менән һөйрәлеп йөрөп уйнаш итә. Балаһы ла ана шул гөнаһ әҙәмтәһе шикелле...

- Инәй, - Дилемма тәүге тапҡыр яҡын итеп мөрәжәғәт итте, - нимә ул бәхет?

- Был донъяла кемгә лә кәрәк икәнһең, тимәк, һин бәхетле кеше. Кәрәге ҡалмағандар китә был донъянан... Иҫке-моҫҡоно ла хәжәте ҡалмаһа, сығарып ырғыталар... Кәрәкһеҙҙәр өсөн үлем дә бәхет иҫәпләнә, бына был әйткәнем үҙемә төбәлгән. Үткәндә ҡыуып сығарғаным өсөн кисер...

Ҡарсыҡ төҫһөҙ күҙҙәрен түшәмгә терәп ята биргәс дауам итте:

- Хоҙай алмай бит йәнемде, рәхмәтле генә булыр инем. Нимәләр генә күрмәнем үҙ ғүмеремдә, нимәләр генә кисермәнем. Ленинградтағы 400 көнгә һуҙылған, миллионлаған кешенең ғүмерен ҡыйған аслыҡтан тороп ҡалдым, еңеү шатлығынан тиләләй илереп ҡыуандым. Ғазап сикмәгән, ят ҡайғыны үҙенекеләй күреп йөрәге аша үткәрмәгән генә шатлыҡ-ҡыуанысты ҡәҙерен, баһаһын белмәй. Был ерҙә бер быуатҡа яҡын ғүмер һөрҙөм, миңә ҡалһа әллә нисә кешенең ғүмерен бер миңә генә биреп ҡуйғандар төҫлө. Аҡланым микән шул йәшәүемде, файҙаһыҙға сарыфламай тотондом микән өлөшөмә төшкән көмөштө? Белмәйем. - Ҡарсыҡ арыны шикелле, теле көрмәлә төшкәс, өндәшмәй ятты, ауырлыҡ менән үрелеп стаканға минераль һыу сайпылтып ирендәрен сылатты. Шунан һүрәнке ҡарашын терекләндерҙе. - Был ҡарсыҡтың улы кемгә оҡшап шулай ибәтәйһеҙ, ҡаты бәғерле икән, тип аптырайһыңдыр, бәлки. Урынлы уйлайһың. Ҡатылыҡ, ҡанһыҙлыҡ ҡайҙан килә торғандыр. Миңә ҡалһа - ейгән ризыҡтан. Был - шәхси фекерем. Хәләл күкрәк һөтөн имеп үҫкән бала миһырбанлы булып үҫә. Ышан әйткәндәремә. Улым күкрәк һөтөмдө иммәне, тип әйтмәйем. Ул, беҙ теләп, көтөп алған гәзизебеҙ булып донъяға килде. Әммә уның ҡанында эт рухының ҡатнашмаһы бар. Шуғалырмы, ул кешеләргә ҡарағанда эттәргә яҡынырыҡ, эт үрсетә, эт ғәме, бурҙайҙар хәстәре менән йәшәй. Тик был мал йәнле тигән һүҙ түгел әле. Был башҡасараҡ...

Ирем дә, үҙем дә Ленинградта тыуғанбыҙ, бер ишек алдында үҫтек, йәшлек йылдарыбыҙ шул данлы ҡалала үтте. Тыуған ҡаламды бер ҙә генә күргем килмәй. Беләһеңме ни өсөн? Заманында Ленинградтан киттем, инде килеп минең өсөн ят Санкт-Петербургҡа ҡайтып инәйемме? Ленинград донъя картаһынан юйылған, исемен генә түгел үткәнен, хәҙергеһен, киләсәген юғалтҡан ҡалаға әүерелде, уның хаҡында бөгөн "город, которого нет", тип йырлайҙар. Ғәфү ит, ситләшә лә китәм. Ирем юғары белем алып заводта инженер вазифаһында эшләне, мин уҡытыусы һөнәрен һайланым. Утыҙынсы йылдар аҙағында өйләнештек. Улыбыҙ тыуҙы. Һуғыш башланғас та иремде фронтҡа алдылар. Тиҙҙән хәбәрһеҙ юғалды, тигән ҡара ҡағыҙы ғына килде. Беҙ улым менән Ленинградта тороп ҡалдыҡ. Тиҙҙән үлемесле блокада башланды. Өҫкә көнө-төнө снарядтар, бомбалар яуа, өҫтәүенә үҙәккә үтерлек һалҡын. Тотош ҡала боҙҙан ғына әүәләнгән төҫлө, шулай булмай тағы, йылытылмаған таш ҡапсыҡта ҡыш сығып ҡара! Һуңғы сиктә уныһына ла сыҙарға мөмкин, әммә аслыҡ үҙәккә үтә. Көн һайын үс яҫылыҡ ҡына икмәк бирәләр. Уны икмәк тип тә атап булмаҫ ине: он, кәрпә, быҫҡы тафы, резина киҫәктәре, тағы әллә нимәләр болғанған нәмә шунда. Икмәк һыныһын һындырайым, тиһәң резина киҫәгенә оҡшап бөгөлөп тора, уны ҡабат-ҡабат сәйнәп көслөк менән йотоп ебәрәһең. Шөкөрана ҡылыр инек тә, уныһы ла юҡ бит әле. Ленинградта бөгөн блокада икмәген музейға һалып ҡуйғандар, тип ишеттем, аҡыллыға ишара, тигәндәй, фәһем алһындар, уйланһындар өсөн эшләнгәндер инде был эш. Бер барып күрергә ине күңелемә яҡын ҡаланы, ҡулыма алып ҡарарға ине шул икмәк киҫәген. Күпме кешене үлемдән аралап ҡалды блокада икмәге! Һуңға табан ҡалала бесәй, эттәр ҙә күҙгә салынмай башланы, кешеләр уларҙы ашар сиккә барып етте. Үләмһә үлмәй икән әҙәм тигәнен, иҫән ҡалдыҡ. Улым да, үҙем дә. Ә бит яҡындарыбыҙ ҡырғын тейгәндәй ҡырылды: ҡайным-ҡәйнәм, атайым-әсәйем, һеңлеләрем... Блокада ҡулсаһы өҙөлгәс көн итеү сағыштырмаса арыулана төштө. Мин мәктәптә балалар уҡытырға керештем, ҡалдырыр кешем булмағас, улымды фатирға бикләп китәм. Йәй еткәс, ишеккә йоҙаҡ һалманым, ҡаҡ фатирҙы бикләүҙән ни фәтеүә. Үҙ көнөн үҙе күрә малайым, тиҫтерҙәре менән уйнай. Тыйнаҡ, әҙәпле, тыңлаулы бала ине ул. Бер саҡ уның ҡылығының үҙгәреүен һиҙҙем: йомоҡҡа әүерелде, һүҙ ҡушһаң, тупаҫ яуап бирә лә мөйөшкә текәлә. Ерле-юҡҡа иҫкәреләнә, сәбәпһеҙгә мыжый. Баштараҡ сәйер холҡона артыҡлап иғтибар бирмәнем. Ни тиһәң дә көндәр буйы яңғыҙы ҡала бит, урам йоғонтоһо ла барҙыр, тип уйланым. Шулай ҙа бер көн эштән аҙға ғына бушап торған арала өйгә ҡайттым да уны тәҙрә аша күҙәтергә керештем: кемдәр менән аралаша был, үҙен нисегерәк тота. Ул ишек алдына сыҡты ла урынында тапана биргәс алан-йолан ҡаранып ситкә китте. Мин дә ҡыҙыҡһындым, ҡайҙа, кемгә бара был? Тиҙ генә кейендем дә тегенең артынан төштөм. Ул күп тә барманы, емерек, ташландыҡ йортҡа ҡайырылды ла юҡҡа сыҡты. Инер ҙә сығыр, тип көтһәм дә сыҡмай ҙа сыҡмай. Һипһенә-һипһенә ярым ҡараңғы йорттоң эсенә индем, кирбес өйөмдәре, тағы әллә нимәләр сәсрәп ятҡан коридор буйлап, бүлмәләрҙе теүәлләп, улымды эҙләргә керештем. Күренмәй. Аптырағас, һаҡ ҡына тауыш бирҙем: "Улым, һин ҡайҙа?.. "Тауыш-тын юҡ. Тағы ҡабатланым да сираттағы бүлмәгә боролдом һәм эт ырылдауына тертләп киттем. Бер аҙҙан күҙҙәрем ҡараңғыға өйрәнгәс, эскә ҡараным. Мөйөштәге алам-һөләм өйөмөндә йөндәре ойошоп тәненә һылашҡан бурҙай һөткә тулышҡан имсәкле ҡорһағын өҫ яҡҡа ҡалҡытҡан да йөгөнөкләп туңҡайған улымды ҡосағына алып тартыныуһыҙ имеҙеп ята. Ошоноса мәхшәрҙә эт нисек тере ҡалғандыр, әҙәм затынан булған йәнде ҡайһылайтып үҙенә ҡабул иткәндер, бер Хоҙай белә. Бурҙайҙың улымды ҡаршылыҡһыҙ ҡабул итеүенә ҡарағанда тәү тапҡыр эшләнмәй был эш. Ә малайым һуң? Моғайын, уны был аҙымға шул ҡәһәрле аслыҡ этәргәндер.

**(Дауамы бар).**

✓ *Киләһе йылға музыка мәктәбебеҙ асылыуға 20 йыл тула. Хәҙер инде костюмдарыбыҙ ҙа, музыка ҡоралдарыбыҙ ҙа етешә. Улым бинаға тулыһынса евроремонт яһатты, ҡыйығын яңынан яптырҙы, йылытыу системаһын эшләтте.*



ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# БӘЙГЕБЕҘГӘ...

## республикабыҙға дан йырларға теләүселәр килһен!



**Ғүмерен изге һөнәргә - йәш быуынды тәрбиәләүгә бағышлаған зат ул бөгөнгө ҡунағыбыҙ. Уҡытыусы, һәүәҫкәр композитор, Ишембай районының ағинәйҙәр ойошмаһы етәксеһе, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Мәрйәм Ғәзиз ҡыҙы СОЛТАНОВА менән уның төрлө яҡлы эшмәкәрлеге тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**



### Дирижер һөнәре ылыҡтырҙы

Музыка менән генә түгел, республиканың хор йәмғиәте менән дә бәйле яҙмышым. Тарихты байҡап ҡараһаҡ, тәүге Бөтөн Рәсәй хор йәмғиәте 1878 йылда уҡ барлыҡҡа килә. 1913 йылда илдә хәлдәр ҡатмарлашып китеү сәбәпле, был эшмәкәрлек туҡтап ҡала һәм совет власы осоронда 1958 йылда ғына яңынан ойошторола. Ошо йылды мин Стәрлетамаҡта мәҙәниәт ағартыу училищеһын тамамлап, Маҡар районы (хәҙерге Ишембай районы) Петровск мәҙәниәт йортона художество етәксеһе булып эшкә килдем. Мине район хор йәмғиәтенең етәксеһе итеп тә һайлап ҡуйҙылар. Дәртләнеп эшкә тотондом. Башҡорт хорын үҫтереү маҡсатында коллективтар араһында конкурс иғлан ителгәйне. Тирә-яҡ ауылдарҙан 40-тан артыҡ йырсыны йыйып, бәйгелә башҡарыласаҡ әҫәрҙәрҙе өйрәнә башланыҡ. Беҙҙең төбәктә бәйге Салауат ҡалаһында үтергә тейеш. Март аҙағы - апрель башы, ни арба, ни сана мәле түгел. Хәтеремдә, тракторға тағылған саналарға тейәлеп ултырып барып, беренсе урын алып ҡайттыҡ. Ошонан һуң мине Рәсәй хор йәмғиәтенең беренсе съезына делегат итеп һайланылар. Шулай итеп, республика делегаттары араһында композитор Камил Рәхимов, дирижер Михаил Фоменков, музыка белгесе Людмила Атановалар араһында мин дә, Мәрйәм Рахманова ла, бар инем. Ошо ваҡиға минең артабанғы яҙмышымды ла хәл итте, тиһәң дә була. Съездан ҡайтышлай уҡ, юлдаштарымдың кәңәше буйынса, Өфө сәнғәт училищеһының дирижер бүлегенә имтихандар тапшырҙым.

### Берләштерә торған шөғөл

Өфө сәнғәт училищеһында уҡыған йылдарҙы иң күңелле саҡтар тип хәтергә алам. Яҡшы уҡыным, атай-әсәйгә ауырлыҡ һалыу ҡайҙа ти ул! Флүрә Ноғоманова менән предприятиелар үткәргән концерттарҙа ҡатнашып, ул йырлап, мин бейеп, өҫтәмә аҡса эшләй инек. Юғары стипендия алам, ауылға күлдәклек тауарын да, яулығын да, калушын да алып ҡайтам. "Уҡымайһыңдыр һин, эшләп йөрөйһөңдөр, атайыңды Өфөгә ебәрәм әле, тикшереп ҡайтһын", - тип әсәйем борсола.

Училищела уҡып йөрөгәндә Башҡорт дәүләт медицина институты студентына - Иреккә кейәүгә сыҡтым. Уҡып бөткәс, Мәсәғүткә эшкә киттем, сөнки иремде унда эшкә ебәргәйнеләр. Ун йыл Мәсәғүт педагогия училищеһында музыканан уҡыттым. Балаларыбыҙ икәү булып китте. Шунан Ишембайға килеп төпләндек. Унда сәнғәт мәктәбендә уҡыта башланым, яңынан хор йәмғиәте рәйесе итеп һайланылар. Тағы ла һәр мәктәптә, һәр уҡыу йортонда, һәр предприятиела хорҙар ойоштороло башланы. Йыл һайын конкурс үткәрәбеҙ, уның йомғаҡлау концерты 9 Май байрамында үтә ине. Ҡала стадионында "День Победы" кеүек йырҙарҙы йырлайбыҙ. Бик тәьҫирле тамаша була торғайны ул. Шул заманда мин ике хор коллективы менән етәкселек иттем, береһе - Ишембай мәҙәниәт йортоноң академик хоры, икенсеһе - Кинйәбулат ауылы хоры. Уларҙың икеһе лә аҙаҡтан "Халыҡ коллективы" тигән исемдәр яуланы. Был коллективтар менән йыш ҡына телевидение аша ла сығыш яһаныҡ. Өфөлә, Стәрлетамаҡта концерттар ҙа ҡуя инек. Ҡайһы бер репетицияларҙы Ишембай райкомының беренсе секретаре Әҙһәм Шәрәфетдинов үҙе ҡарап ултыра торғайны.

Хор - ул халыҡты берләштерә, рухи һәм физик сәләмәтлекте нығыта торған көскә эйә сәнғәт төрө. Хорҙа йырлаған бер нисә йырсыны ғына иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: Мәғәфүр Хисмәтуллин, Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова, Фәриҙә Ҡудашева - улар барыһы ла оҙон ғүмер кисерҙе. Хор йырсының һәләтен дә аса, тыуышын да тигеҙләй. Яңғыҙың йырлағанда үҙеңдең тауышыңды ишетмәйһең, ә бында башҡаларҙы ишетеп, үҙеңде камиллаштыраһың. Минең тәжрибәмдә, бөтөнләй тауышы юҡ, тип иҫәпләгән балаларҙың да тауышы асылып, йырлап киткән осраҡтар булды.

### Хыялдар тормошҡа аша

Республиканың төрлө төбәктәрендә балаларҙы музыканан уҡытып йөрөп, үҙемдең ауылыма ярҙам итә алмайым, тип гел бошондом. Ауылыма ҡайтып, ауылдаштарымдың балаларына музыкаль белем бирергә яҙһа ине, тигән теләк гел күңелдә йәшәне. 60 йәшем тулғас, ошо хыялым тормошҡа ашты. Башта Кинйәбулат ауылында музыка мәктәбе астым. 1998 йылда Маҡар мәктәбенең ул ваҡыттағы директоры Харис Фәтҡуллин менән район башлығына барып, музыка мәктәбе асыуға рөхсәт һораныҡ. Мәктәп асыу түгел, кешеләргә эш хаҡы түләй алмаған ауыр осор ине. Шулай булһа ла, ҡаршы килмәнеләр. Элекке складты бина итеп бирҙеләр. Уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа, уйын ҡоралдары ла юҡ. Улым Радик парталар, ултырғыстар, бер пианино һатып алып бирҙе. Һалым идаралығында эшләгән Ибрай ауылы уҙаманы Ринат Мөхәмәтов комиссион магазиндан ике пианино һатып алып бүләк итте. Тәүге йылда өс кеше эш башланыҡ. Уҡыусылар күбәйгәс, икенсе йылына Ишембайҙан уҡытыусылар йөрөп эшләй башланы. Киләһе йылға музыка мәктәбебеҙ асылыуға 20 йыл тула. Хәҙер инде костюмдарыбыҙ ҙа, музыка ҡоралдарыбыҙ ҙа етешә. Улым бинаға тулыһынса евроремонт яһатты, ҡыйығын яңынан яптырҙы, йылытыу системаһын эшләтте. Музыка мәктәбендәге бөтөн эште шулай бергәләп, ғаиләбеҙ менән алып барабыҙ. Тәүге сығарылыш уҡыусыларымдан өсәүһе - Алһыу Ирғәлина, Эльмира Нәбиуллина, Гөлнәзирә Иманғолова бөгөн беҙҙә эшләй. Музыка мәктәбебеҙҙә барыһы 70 бала шөғөлләнә. Ошо йылдар эсендә беҙҙә уҡыған һәр бала тормошта үҙенең юлын тапты, уҡыу йорттарында уҡыны, матур ғаилә ҡорҙо. Былары өсөн дә бик шатланам, сөнки матурлыҡҡа, гүзәллеккә ҡағылған бала насар юлға баҫмай икәненә инанғанмын.

### Гел үҙенә тартты Маҡарым

Бөгөн мин атай нигеҙенә һалынған яңы йортта йәшәйем. "Һин пәрҙә менән тыуҙың", тигәйне әсәйем миңә ҡасандыр. Пәрҙәне атайым ергә күмгән, шул мине ғүмерем буйына ошо тупраҡҡа тартып тик торҙо, шикелле. Тәүге йырҙарым да ауылыма бағышланды. Ниндәй генә сит илдәрҙә булманым, әммә уларҙың береһе лә ылыҡтырмай мине. Ауылым гел үҙенә тартып ҡына тора. Өсөнсө йыл рәттән ауыл советы депутатымын, киләһе йылға был йөктө башҡаларға тапшырырмын тип торам. Райондың "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһемен. Республикабыҙҙың һәр төбәгендәге кеүек, беҙҙең ағинәйҙәр ҙә әүҙем. Иң мөһиме, улар киләсәк быуынды үҙ йолаларыбыҙ, үҙ тарихыбыҙ, үҙ шөғөлдәребеҙ, үҙ асылыбыҙ нигеҙендә тәрбиәләүгә ғәйәт ҙур көс сарыф итә. Бер байрам да уларһыҙ үтмәй. Маҡар ағинәйҙәренең йыйылыр өсөн үҙ бүлмәһе бар, унда матур итеп ремонт эшләп алдыҡ.

### Халыҡҡа хеҙмәт итергә бурыслыбыҙ

Һәләт - һәр кемгә Аллаһы Тәғәләнән бурыс итеп бирелә. Ваҡытында ошо һәләтеңде үҫтереп, ҡулланып, халыҡҡа хеҙмәт итергә бурыслыбыҙ. Һөнәрем музыка менән бәйле булһа ла, көй яҙыуға 50 йәшем тулғас ҡына тотондом. Был һәләт миңә әсәйемдән күскәндер, тием. Атайым баҡыйлыҡҡа күскәс, үҙе йыр сығарып йырлар ине. Шулай бер тыңлап йөрөйөм, әсәйем:

Иртәнсәккәй тороп, тышҡа сыҡһам,
Аҡ таҫтамалым сөйҙә юҡ.
Бабайымды ғына һораһағыҙ,
Ожмахтарға китте, өйҙә юҡ, - тип йырлап йөрөй. Күп ине уның бындай йырҙары.

Маҡарҙа уҡыта башлағас, балалар өсөн яҙылған йырҙарҙың дәрес үткәреүгә бик тура килмәүен аңланым һәм үҙем йырҙар яҙа башланым. Көйҙәрҙе теоретик яҡтан нигеҙләп, музыка дәресендә ҡулланырлыҡ итеп яҙырға өйрәндем. Әле бына яңы ғына тағы йырҙар китабы сығарҙым. Өлкәндәр өсөн яҙылған йырҙарҙы күберәк яҡташтарымдың шиғырҙарына яҙам. Көй яҙайым әле, тип кенә яҙып булмай, илһам үҙенән-үҙе килә. Хәҙер инде өс йырҙар китабы авторымын.

### Тырыш булыу уңышлы итә

Тормошта нимәгәлер өлгәшәм тиһәң, бик тырыш булырға кәрәк. Тормош иптәшем Ирек вафат булғас, ауырып китеп, операция үткәрҙем. Дауахананан ҡайтҡас, ҡыҙым менән улымды янымa ултырттым да, беҙ был ҡайғыны хеҙмәт менән генә еңә алабыҙ, тинем. Яңы машина һатып алғайныҡ, Ирек унда ике ай ҙа йөрөп өлгөрмәне. Шул машинаны һаттым да, аҡсаһына улымды сит илгә, Балкан буйлап сәйәхәткә ебәрҙем. Үҙеңә машинаны үҙең эшләп тапҡан аҡсаға алырһың, тинем. Сөнки улымды машинаға ултыртып сығарып ебәрһәм, насар ғәҙәттәргә, насар йоғонтоло дуҫтарға әүрәүҙән һаҡлай алмаҫымды аңлай инем. "Үәт, сит илдә йәшәйҙәр", - тип, күҙҙәре янып ҡайтты сәйәхәттән. "Тырышһаң, улым, һин уларҙан да яҡшыраҡ йәшәй алаһың", - тип дәрләндерҙем. Был ваҡытҡа Радик Ишембайҙағы нефть техникумын тамамлап, Өфө дәүләт нефть техник университетына имтиханһыҙ уҡырға ингәйне. Университетта уҡыу оҡшаманы, юрист булам, тине. Биатлон буйынса спорт мастеры ул. Ғөмүмән, балаларым был тормошта нимәгә өлгәшкән, барыһы ла үҙҙәренең тырышлығы арҡаһында.

Баланы һүҙ менән түгел, үҙ өлгөң, үҙеңдең эшең менән тәрбиәләйһең. Әсәйемде 18 йыл ҡараным. Әсәйемә булған мөнәсәбәтемде улар миңә күсерә. Операциянан һуң көндөҙ сәнғәт мәктәбендә уҡытам, кисен йә академик хор, йә Кинйәбулат ауылы хоры менән шөғөлләнәм, конкурстар үткәрәм. Өйгә йүгереп кенә инер ҙә, йүгереп кенә сығып та китер инем. "Улым, һин - апайың, ҡыҙым, һин ҡустың өсөн яуаплы", тип көндерҙем балаларымдың аңына. Бөгөн бер-береһе өсөн өҙөлөп торалар. Аталары ла бик аҡыллы ине. Ғөмүмән, мөхәббәтле була белергә лә, мөхәббәткә яуап ҡайтара белергә лә кәрәк. Ireң һине ярatһын өсөн уға үҙеңдең яратыуыңды, хөрмәтеңде күрһәтергә лә тейешһең. Ир кеше матур мөнәсәбәттәргә тағы ла күберәк йылылыҡ менән яуап ҡайтара ул. Ғаилә тормошоноң ҡото - ҡатындан, ошо яуаплылыҡты ла аңлаһа ине йәштәр.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Мәрйәм Ғәзиз ҡыҙы ошо көндәрҙә бик яуаплы бәйгене ойоштороу эштәре менән мәшғүл. 24 ноябрҙә Ишембай ҡалаһында "Көҙгө һулыш" тип аталған башҡорт хорҙары һәм вокаль ансамблдәренең республика фестиваль-конкурсы үтәсәк. Ул башҡорт вокал-хор музыкаһын пропагандалау һәм үҫтереүгә лә булышлыҡ итер, тигән ышаныста Мәрйәм Ғәзиз ҡыҙы. Республиканың 100 йыллығына, шулай уҡ композиторҙар Заһир Исмәғилев менән Рафиҡ Сәлмәновтың тыуыуына 100 йыл тулыуға ла арналасаҡ ул. Шуға ла, положение буйынса, бәйгелә ҡатнашырға теләгән коллективтар тап ошо композиторҙар әҫәрҙәрен әҙерләргә тейеш. Сараны йомғаҡлау тантанаһында йыйылма хор З. Исмәғилевтың Р. Ниғмәти һүҙҙәренә яҙған "Дан һиңә, Башҡортостан!" әҫәрен башҡарасаҡ. Ғаризаларҙы ноябрҙең 20-һенә тиклем Ишембай районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлегендә ҡабул итәләр.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙЫЛМАЙЫП ЙӘШӘЙЕК

■ Табиптар әйтеүенсә, оҙаҡ йәшәү өсөн сәләмәт тормош алып барырға кәрәк. "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтарын улар аҙыраҡ ҡуллана. Оҙон ғүмерлеләр кәңәшенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай уҡ ҡайһы берҙә үҙенә ятҡан аҙыҡтарынды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә эшһеҙ торорға тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштa булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Бөйөк Британия ғалимдары йәйәү йөрөүҙең психик торошҡа яҡшы тәьҫир итеүен асыҡлаған. 18 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, эш урынына йәйәү, йә булмаһа, велосипедта килеүселәр физик йәһәттән генә түгел, психик яҡтан да үҙен яҡшыраҡ тоя. Улары үҙҙәрен тыныс тота, стресҡа бирешеп бармай, эшкә һәләтлелектәре лә юғары һәм, иң мөһиме, үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя. Шәхси автомобиль менән йәмәғәт транспорты араһында ла айырма бар икән. Уларҙың икенсеһендә йөрөү файҙалыраҡ, ти ғалимдар. Сөнки руль артында кеше көсөргәнеш кисерергә мәжбүр, ә йәмәғәт транспортында бер нәмә тураһында уйламай ғына китап уҡып йәки һөйләшеп барырға була.

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Аныҡыраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Нью-Джерси штаты ғалимдары билдәләүенсә, һейҙек ташы ауырыуы менән яфаланған сирлеләр һау бөйөрлөләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге күңелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, быға тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар. Уларҙың күптәре был турала белмәй ҙә. Ғәҙәттә, таш урынынан ҡубып, хәрәкәт итә, йәиһә бөйөрҙән сыға башлағас ҡына ауыртыу барлыҡҡа килә. Ир-егеттәрҙә был сир йышыраҡ осрай.

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Бөгөн беҙ японДарҙың лазерлы станогын "ауыҙлыҡлап", уны ярайһы уҡ яҡшы килем сығанағына әйләндерә алған хаҡлы ялдағы инженер-механик менән таныштырабыҙ. Оҙаҡ йылдар Магнитогорск металлургия комбинатының эҫе цехында эшләгән, пенсияға сыҡҡас, ғаиләһе менән Учалы ҡалаһына күскән, шәхси эшҡыуарлыҡҡа тотонған Азат Мөбәрәк улы Хәбибуллинды һәм уның ҡатыны Аида Яныбай ҡыҙын беҙ баш ҡалалағы "ВДНХ-экспо" күргәҙмәләр һарайында үткән "Арт-ладъя" халыҡ кәсептәре күргәҙмәһендә осратҡайныҡ.**

# АҒАС СЕМӘРЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ



Һөйләшеүҙән мәғлүм булыуынса, Азат Мөбәрәк улының һөнәри эше металлургия комбинатында тимер ҡырҡыуҙан ғибәрәт булған икән. "Хәҙер ағасҡа күстем", ти хаҡлы ялдағы инженер-механик. Тимәк, тип уйларға урын бар, геройыбыҙ ғүмере буйы ауыр сәнәғәт машиналары менән эш иткән, уларҙың тотороҡло эшләүен контролдә тотҡан. Шуғалыр, лазер станогын әңгәмәсебеҙ япъябай һүҙҙәр менән еңел генә аңлатты ла бирҙе:

-Станок лазер менән эшләй, һанлы программа ярҙамында идара ителә. Йәғни, машинаға векторлы программа ярҙамында эш ҡушһаң, ул ҡушылғанды үҙенә һалынған алгоритм ярҙамында атҡара. Уның лазерлы "ҡулы" материалдың айырым өлөштәрен ҡырҡып төшөрә, графикта сағылдырылған әйберҙе имен ҡалдыра. Лазер быяла колбаға тултырылған углекислый газ иҫәбенә яна...

Артабан был станоктың хаҡы, уны тотоуға, хеҙмәтләндереүгә киткән сығымдар менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Азат Мөбәрәк улы станоктың хаҡы яҡынса күпмегә барып баҫыуын беҙгә әйтеп торманы. Станокты Өфө дәүләт нефть техник университетында уҡыған сағында улдары Вадим һатып алған булған икән. Алған да, үҙенә йүнәлтмә менән Когалым ҡалаһына эшкә юлланырға кәрәк булғас, роботты нисек "эшкә егергә" кәрәк икәнен атаһы менән әсәһенә матурлап аңлатҡан. Һәр сувенирҙың эскизын егет үҙе эшләй ҙә, интернеттан атаһы менән әсәһенә ебәрә, улар яңы команданы станокка тапшыра һәм, килеп сыҡҡан ярымфабрикатты йышып, матурлап, кәрәк икән - йәбештереп, ҡороп ҡуя.

- Килемебеҙ сығымдарҙы ҡаплай, шулай ҙа беҙ аҡса артынан ҡыуған кеше түгелбеҙ. Аҡса аҡһа ла һәйбәт, тамһа ла яҡшы, тигәндәй. Был шөғөлөбөҙ беҙгә ваҡытты файҙалы уҙғарыу сараһы ғына ул, тиһәм, арттырыу булмаҫ. Оло йәштә оҙаҡ йоҡлап булмай, шуға иртә торабыҙ. Торабыҙ ҙа, ҡул эш һорағас, станок ултырған бәләкәй өйгә йүнәләбеҙ. Йәйен станокты йылытыу кәрәкмәй, ә ҡышҡы иртәләрҙә мейескә ут яғып, бәләкәй өйҙө йылытып ебәрәһең дә, робот-станок йылынһа, уға сираттағы мәсьәләне "аңлатаһың" инде. Ә ул, эше булһа, зәһәр утын ҡабыҙып, ағас, тимер ҡырҡа, һырлай һәм башҡа ғәмәл атҡара. Әйткәндәй, материалдың тығыҙлығына ҡарап, станок газды ла төрлөсә тотона. Сеймал тығыҙ, ҡаты икән - газы ла күберәк тотонола. Шуға беҙ, артыҡ сығымлы булмаһын, тип, йоҡа ағастар менән генә эш итергә тырышабыҙ, - ти Азат Мөбәрәк улы.

Күргәҙмәгә ҡуйылған семәрле әйберҙәрҙе робот-станок эшләгән, тип әйтерлек тә түгел: шундай нескәлек, шундай матурлыҡ бөркөлә уларҙан. "Ә был сувенирҙарҙы урын-еренә еткереп ҡуйыу өсөн һеҙгә ҡасау-балталарығыҙҙы ла эшкә егергә тура киләләр бит?" - тип һорайбыҙ йәнә.

- Эйе, был эш бик ҙур иғтибар һәм һаҡлыҡ талап итә. 1 генә миллиметрға яңылышлыҡ ебәрҙеңме - ҡушма өлөштәрҙән ҡоролаcаҡ әйберең килеп сыҡмаясаҡ. Ул ғына ла түгел, был эштә материалдарҙың ҡаршылығы (сопротивление материалов) тигән төшөнсәне лә күҙ уңында тотмайынса булмай. Был йәһәттән миңә үҙемдең һөнәрем ныҡ ярҙам итәлер, тим. Әйтәйек, бынау семәрле гөл ултыртҡысты ғына алайыҡ. Ул бер нисә фанерҙы бер-береһенә беркетеү ысулы менән яһалған. Мин уға бар көсөм менән таянһам да бирешмәйәсәк. Мин йыш ҡына оҫтаханама килеүселәргә бер ғәләмәт күрһәтәм. Тотам да, яңы ғына эшләнгән, тәү ҡарашҡа, нескә генә тойолған сувенир өҫтөнә 16 кг гер ултыртып ҡуям, йә бөгөнгө һымаҡ, таянып күрһәтәм. Күптәр, әйбер боҙолор, емерелер, тип, ҡурҡып китә...

Етештереү күләме, клиент базаһы, уңыштар тураһында һорауыбыҙға, әңгәмәсебеҙ, бөгөнгәсә 400-500 төр продукциябыҙ бар, тине. Улар араһында Германияға оҙатыу өсөн эшләнгән семәрле кәрәҙле бал һауыты (Белоретта йәшәүсе бер умартасы уны йөҙәрләп эшләтеп тора икән), "Ҡөрьән" китабын хәтерләткән сувенир, төрлө һындар, яҙыуҙар, хатта, һыуытҡыстарға йәбештереп ҡуймалы магнитлы сувенирҙар ҙа бар икән.

- Умартасылар бик теләп хеҙмәттәшлек итә, - ти әңгәмәсем, - һәр ҡортсо үҙе теләгән логотип эшләтеп ала. Эшләтә лә, уны башҡаларға һатмауыбыҙҙы һорай - беҙҙең продукцияны (һауытты, яҙыуҙарҙы, һүрәттәрҙе, сувенирҙарҙы) үҙенең тауарының "визит карточкаһы" итеп файҙалана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Азат Мөбәрәк улы һүҙебеҙ аҙағында әсенеп, былай тине: "Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙер ошондай ағас менән эшләр кешеләр ҙә ҡалмай бара. Беҙҙең быуын китһә, кем эшләр икән, тип аптырап та ҡуям. Йәштәрҙең эшкә бөтөнләй барымы юҡ хәҙер. Күптәр эшләмәй генә йә еңел эштә йөрөп кенә аҡсаны "көрәп" алырлыҡ шарттар эҙләй. Был йәһәттән мин улым менән ғорурлана алам. Был эште лә улым башлап ебәрҙе бит. Был өлкәлә дүртенсе йыл эшләйбеҙ. Былтыр Өфөләге ВДНХ-экспо комплексында үткән "Арт-Ладъя" халыҡ кәсептәре күргәҙмәһендә 2-се урын алдыҡ. Мәскәүгә саҡырылдыҡ, Мәскәү ВДНХ-һында ла булдыҡ. Мәскәүҙән районға ла, үҙебеҙгә лә адреслап яҙылған маҡтау ҡағыҙҙары алып ҡайттыҡ..."**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**



*ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР*

# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

* * *

Әҙ йоҡо - тәмле йоҡо,
Күп йоҡо - ғәмле йоҡо.

* * *

Тәмле йоҡо - тән аҙығы,
Күп йоҡо - йән ҡаҙығы.

* * *

Яҡшы һүҙ дауалай,
Яман һүҙ яралай.

* * *

Малды табып була,
Һаулыҡты табып булмай.

* * *

Ҡырҡта эш менән маҡтаналар,
Иллелә көс менән маҡтаналар,
Алтмышта аҡыл менән маҡтаналар,
Етмештә йәш менән маҡтаналар,
Һикһәндә һуш менән хушһыналар,
Туҡһанда йүн юҡтан юҡһыналар.
Йөҙҙө кем белә лә, кем юҡ.

* * *

Аҡса юғалтыу әллә ни түгел,
Ваҡыт юғалтыу - күпте юғалтыу,
Һаулыҡ юғалтыу - барыһын юғалтыу.
Һаулыҡ - байлыҡ
Аҡса - бер айлыҡ.

* * *

Әйберҙе һатып алып була,
Һаулыҡты һатып алып булмай.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Ваҡыт сарыф итеп, башҡа юлын эҙләмәгеҙ, тик Аллаһтың ғазабынан ҡурҡҡан, фәҡәт иманлы кеше генә ғәйбәт һөйләүҙе бөтөрә ала. Асыу менән көнсөллөктө бөтөрә торған аят-хәҙистәрҙе уҡығыҙ.***



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҒӘЙБӘТТЕҢ ҺӘЙБӘТЕ БУЛМАЙ



**Мөхәммәт бәйғәмбәр сәхәбәләренә: "Ғәйбәт - ул башҡа бер мосолман ҡәрҙәшеңдең яратмаған нәмәһен кешегә һөйләүҙер", - тип әйтте. Әгәр ҙә мосолман ҡәрҙәшеңдә мин һөйләгән сифаттар, ғәйептәр, етешмәгән урындар ысынлап та булһа, улар ҙа ғәйбәтме, тигән һорауға, бәйғәмбәр: "Әгәр һин һөйләгән сифаттар, ғәйептәр уларҙа ысынлап та булһа, һөйләгән һүҙең - ғәйбәт, әгәр ҙә уларҙа һин һөйләгән сифаттар булмаһа, ул ваҡытта яла ягыу була", - тип яуап бирҙе. Аллаһы Тәғәлә: "Кешеләрҙең ғәйебен тикшермәгеҙ", - тип әмер итә. Әлбиттә, Бәйғәмбәребеҙ әйткәнсә, барса кешеләр ҙә хаталы, ғәйепле. Иң тәүҙә кеше үҙе үҙ ғәйебен белергә тейеш, үҙеңдең етешһеҙлектәреңдә белә тороп, кеше ғәйебен тикшереү - аҡылға һыймаҫлыҡ эш. Әгәр ҙә мосолман ҡәрҙәшең янына барып, етешһеҙлеген яғымлы һүҙҙәр менән әйтһәң йәки төҙәтһәң, ул саҡта һиңә әжере булыр. Ә туранан-тура тупаҫ итеп әйтеп, күңелен ҡалдырыу ярамаҫ.**

### Шәриғәт хөкөмө

Һәр енәйәткә хөкөм сығарыла. Ә мосолмандарҙа хөкөм - шәриғәт хөкөмөләр. Шәриғәт хөкөмө Ҡөрьән-Кәрим менән хәҙистән алына. Мәҫәлән, урлаусы кешегә - ҡулын киҫеү, уҫал ниәт менән берәйһен үлтереүсегә - үлем хөкөмө тейеш. Шуға күрә, шәриғәт хөкөмө менән кеше уйлап сығарған хөкөм бер түгел. Мәҫәлән, бер9 19 кешене үлтергән, әммә уны үлем язаһына тарттырмағандар. Уйлап ҡараһаң, уға бер кешене үлтергәс үк үлем язаһы бирһәләр, 18 кеше үлемдән һаҡлап ҡалыныр һәм 18 ғаиләнең балалары етем ҡалмаҫ ине. Әлбиттә, шәриғәт хөкөмө хаҡ һәм ғәҙел.

Ғәйбәттең хөкөмө ниндәй? Яуап: "Ғәйбәт - хәрәм эш, йәғни Аллаһы Тәғәлә ҡәтғи рәүештә тыйған эш. Хәрәм эшкә донъяла ла, йәһәннәмдә лә әрнеү-һыҡрауҙан башҡа яза юҡтыр". Хәҙистәрҙең береһендә: "Кем Аллаһы Тәғәләгә үә ҡиәмәт көнөнә ышана, ул кеше изге һүҙ һөйләһен, әгәр изге һүҙ һөйләмәһә, тик торһон", - тиелә. Изге һүҙҙәрҙең беренсе урындағыһы Аллаһы Тәғәләнекелер. Ҡөрьәндән берәй аятты уҡып, шуның мәғәнәһе тураһында башҡаларға һөйләһә, ниндәй оло әжер-сауаптарға ирешер ине әҙәм балаһы. Ғәйбәт һүҙҙәре өсөн барыбыҙ ҙа берәй көн килеп яуап бирәсәгебеҙҙе онотмайыҡ.

### Тыңлау ҙа гонаһтыр

Иблис менән шайтандар барса хәрәм эштәрҙе - ғәйбәтте, зинаны, ялғанды зинәтләп, кешеләргә күрһәтә белә. Шуға ла кеше тәбиғәте менән хәрәм нәмәләргә ҡыҙығыусан. Мәҫәлән, уның араҡы эсеп ҡарағыһы, ҡулланырға ярамаған нәмәне ҡулланғыһы, ишетергә ярамағанды ишеткеһе килә. Ләкин теләктәрҙе үйгәнләп тороусы - ул иманыбыҙҙыр. Мосолман ҡәрҙәштәребеҙгә иманы ни тиклем ҡәҙерле булһа, уға йәшәүе енел булаҫаҡ, сөнки иман насар, хәрәм эштәрҙән алыҫлаштыра. Ә иманы зәғиф мосолмандар берәй мосолман ҡәрҙәшенең ғәйебен ишетһә, берәйһенә һөйләмәй һис булдыра алмай, сөнки хәбәр ингән урындан ҡытыҡлаған шайтан да инә һәм ул туҡтауһыҙ ошо хәбәр тураһында һөйләргә ҡотортоп тора. Ул сер генә итеп берәйһенә һөйләп ҡуя, ғәйбәт һүҙҙәр шулай телдән-телгә күсеп тарала. Ғәрәптә бер мәҡәл бар: "Һүҙ һөйләһәң - уның олтаныһың, һөйләмәһәң - уның солтаныһың". Йәғни һүҙ ауыҙыңдан осоп сығып китһә, уның ҡолона әүереләһең, әгәр ул һүҙҙе һөйләмәйсә, үҙеңдә ҡалдырһаң, һин уның хужаһы булаһың. Ғәйбәтте тыңлау, һөйләү кеүек үк, хәрәм эш һәм ҡәтғи тыйыла. Шулай булғас, һәр мосолман ғәйбәт һөйләгән ерҙәрҙән йыраҡ булырға тейеш. Әгәр берәй кеше һиңә ғәйбәт һөйләй башлаһа, һин уны туҡтатырға тейешһең.

### Тәүбәңә килә һал

Аллаһы Тәғәлә үҙенең ҡолдарына мәрхәмәтлелер, һәр саҡ изге эштәренә ярҙам итеүселәр. Һәм ул һәр хәрәм эшкә тәүбә итеү юлын да күрһәтеп ҡуйған. Хатта ғәйбәттең дә тәүбәһе бар. Әгәр ҙә мосолман ҡәрҙәшеңдең ғәйебен һөйләһәң, оҙаҡҡа һуҙмайынса, тәүбә итергә кәрәк.

Беренсенән, ғәйбәтсе һөйләгән ғәйбәтенә үкенергә, ҡайғырырға, башҡаса ундай һүҙҙе һөйләмәҫлек хәлгә килергә тейеш. Икенсенән, ғәйбәтсе кемде һөйләһә, шуның янына килеп, түбәнселек менән ғәфү үтенергә тейеш. Тәүбәгә ашығыу мотлаҡ, бер-берегеҙҙең аралары хәләл ҡылығыҙ. Әгәр ҙә ул кеше үлеп китеп, ғәфү үтенергә өлгөрмәһәгеҙ, ул ваҡытта үлеп киткән ҡәрҙәшеңә даими рәүештә изге доғалар ҡылырға тейешһең. Уның исеменән фәҡир, етем меҫкендәргә саҙаҡа биреү һәм уның гонаһтары өсөн Аллаһтан ғәфү үтенеү кәрәк. Был донъяла уны үтәү еңел, әммә ахирәткә күскәс, ҡиәмәт көнөндә бик ауыр булаҫаҡ.

### Ни сәбәп?

Әҙәм балаһының нәфсеһе бар, ул нәфсе бер ҡасан да туймай торған мәхлүҡтер. Нәфсегә, күҙгә ниндәй яҡшы нәмә күренә, барыһы ла кәрәк. Ғәйбәттең килеп сығыу сәбәптәренең иң олоһо - асыу килеүе. Кешенең асыуы килһә, һөйәкһеҙ телгә хужа бөтә, ул хатта ялғанды ҡушып һөйләүҙән дә тартынмай. Икенсеһе - хәсәтлек (көнсөллөк). Хәсәтлектең мәғәнәһе - ҡәрҙәшеңдең ҡулындағы малды, ниғмәтте ниндәй ҙә булһа юл табып, юҡ итеүҙер. Әҙәм балаһы тыуғанда яланғас тыуа, аҙаҡ кейемле, торлаҡлы, мал-тыуарлы булып китә. Әлбиттә, байлыҡ һәр бер кешегә тигеҙ бирелмәйҙер. Ләкин Аллаһы Тәғәлә ғәҙел, барса эштәрен хикмәт менән эшләүсеһе, тик беҙ генә уның оло хикмәттәренә төшөнөп бөтә алмайбыҙ. Шулай итеп, ярлырағы байҙарҙың малына ҡыҙыға һәм көнләшә башлай. Йәғни унда хәсәтлек уяна. Әммә ул хәсәтләгән бер кемгә лә һиҙҙермәскә тырыша. Дуҫының янында дуҫтарса ҡыланһа ла, ысынында иһә, уны күрә алмай. Көнсөллөктән дуҫының ғәйебен эҙләп, кешеләргә һөйләй башлай. Яуыз ниәттә төрлө ғәйбәт таратып, дуҫының күңелен төшөрөп, малына, ғаиләһенә зыян килеүен теләй. Һәм ул ғәйбәт дуҫының тормошона зыян итмәйенсә ҡалмайҙыр. Тик зыян бит ул ике яҡлы: бер яғы дуҫына булһа, икенсе яғы үҙенә төшә.

### Телеңде "дауала"

Ауырыуҙарға шифа биреүсе - ул Аллаһы Тәғәләләр, шуға ла шифаны беҙ фәҡәт Аллаһы Тәғәләнән һорарға тейешбеҙ. Ә ғәйбәттән нисек дауаланырға һуң? Ғәйбәтте юҡ итеү өсөн уның сәбәптәрен белергә, уны бөтөрөү өсөн көрәшергә һәм тамырынан юҡ итергә кәрәк. Сәбәптәрҙең беренсеһе - асыу килеү, икенсеһе - көнсөллөк, тинек. Асыу килеү менән көнсөллөктө мосолман кеше Аллаһтың Ҡөрьәнен үә рәсүленең хәҙистәрен уҡып, уның мәғәнәһенә төшөнөп һәм уның өсөн ниндәй яза буласағын аҡылы менән уйлап, фекерләп кенә бөтөрә алалыр. Ваҡыт сарыф итеп, башҡа юлын эҙләмәгеҙ, тик Аллаһтың ғазабынан ҡурҡҡан, фәҡәт иманлы кеше генә ғәйбәт һөйләүҙе бөтөрә ала. Асыу менән көнсөллөктө бөтөрә торған аят-хәҙистәрҙе уҡығыҙ.

### Хөкөм эйәләренә һөйләргә була

Ысынында ғәйбәт һөйләү - харам эш, әммә шәриғәт алты урында башҡалар ғәйебен асыуҙы ғәйбәт тип иҫәпләмәй. Беренсенән, хөкөм эйәләренә (судьяларға) залимдың ғәйебен асып биреү; икенсенән, насар, яман, хәрәм эште (наркотик, самогон һатыу һ.б.) күреп, уны туҡтатыу ниәте менән әйтелгән һүҙ; өсөнсөнән, берәй ғалимдан, мәҫәлән, фәлән кеше миңә золомлоҡ ҡылды, миңә ни эшләргә, тип кәңәш һорағанда икенсе берәүҙең ғәйебен асыу; дүртенсенән, кешеләрҙе берәр насар ғәмәлгә төшмәһен өсөн, әйтәйек, берәйһе, белмәйенсә, урланған әйберҙе һатып алырға теләһә, алдан киҫәтеү; бишенсенән, гонаһты кешеләргә күрһәтеп эшләгән (араҡы эскән, тәмәке тартҡан, дуңғыҙ итен ашаған) кеше хаҡында ғибрәт алһындар өсөн башҡаларға һөйләү; алтынсынан, бер үк исемле кешеләр бик күп булып, береһен танытыу ниәте менән уның ғәйебен асыу ғәйбәткә инмәй. Тик һәр нәмәнең тәртибе булған кеүек, был эштең дә үҙ тәртибе бар. Беренсенән, ихласлыҡ кәрәк. Һәр бер эш ысын күңелдән эшләгәндә генә әжерле була. Икенсенән, мөмкин ҡәҙәр ул кешенең исемен әйтмәскә тырыш. Өсөнсөнән, ҡәрҙәшең хаҡында әртырып йәиһә кәметеп һөйләмә. Дүртенсенән, һөйләнгән һүҙҙәрҙән фәҡәт файҙа ғына булырлыҡ булһын. Мосолман ҡәрҙәшеңдең ғәйебенән башҡа, изге эштәрен, мәрхәмәтлеген дә иҫкә алыу һәм уға оҡшарға тырышыу - күркәм эш.

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Шулай алты йыл планета буйлап сәйәхәт иттем. Заводтарҙа һәм төрмәләрҙә сығыш яһаным, меңәрләгән сауҙа үҙәктәрендә карикатуралар эшләнем. Ваҡытымдың күп өлөшөн ҙур теләк менән башҡарҙым, ә ҡайһы берҙә, сираттағы ҡунаҡханала уянғанда: "Тағы бер сауҙа үҙәге, һәм минең ҡоҫҡом килә башлаясаҡ!" - тип уйлай инем. Шулай магазин артынан магазин, ҡала артынан ҡала, ил артынан ил яулап, китабым халыҡ-ара танылыу алды. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң гәзит һәм телевидениеларҙан миңә үҙҙәре шылтырата башланылар. Бик йыш: "Китаптарың миллионлаған тираж менән һатылһын өсөн нимә эшләргә кәрәк?" - тип һорайҙар. Мин уларға: "Миллион миль осорға, 500 тапҡыр халыҡ алдында сығыш яһарға, мең интервью бирергә һәм... 23 тапҡыр багажыңды тулыһынса юғалтырға!" - тип яуаплайым. Бында һүҙ китап йәки нәшриәт бизнесы тураһында бармай. Һүҙ - уңышлы проект хаҡында. Мөмкинлек килеп тыуыу менән эшләй башла.

### Мауығыу

Эшең өсөн янғанда, барыһы ла энтузиазм менән тормошҡа аша. Мауығыуың ныҡ көслө булғанда башҡа өҫтәмә дәртләндереү кәрәкмәй.

Мәҫәлән, ғүмер буйы хыялығыҙҙа йөрөгән теләгегеҙҙе тормошҡа ашырып, ресторан астығыҙ икән. Әгәр уға кеше йөрөмәһә, төрлө кулинар рецептар ҡулланаһығыҙ, дизайнды үҙгәртәһегеҙ, хатта сират барлыҡҡа килгәнгә тиклем урынында алмаштыраһығыҙ. Ниндәйҙер ваҡытта аҡсағыҙ бөтһә, энтузиазмығыҙ менән аҡсалы берәйһен дәртләндерәһегеҙ, йәғни үҙегеҙгә бизнес-партнер табаһығыҙ. Бик күп күңелһеҙлектәр кисерергә тура килеүенә ҡарамаҫтан, күңел төпкөлөндә дөрөҫ юлда тороуығыҙҙы тояһығыҙ. Маҡсатыңды белеү - тормош энергияһы сығанағы. Ҡыҙыҡлы ғәмәл менән үҙегеҙ өсөн генә түгел, һеҙҙе урап алыусылар өсөн дә шөғөлләнергә кәрәк. Сөнки тормошта хыял менән янмаған, бер нәмә эшләмәһәләр ҙә тормоштан ялҡҡан һәм арыған кешеләр бик күп. Хыялығыҙҙы тормошҡа ашырырға ҡарар иткәс, барыһы ла майлап ҡуйған кеүек барырына өмөтләнмәгеҙ. Ауырлыҡтар, ҡағыҙа булараҡ, тағы ла артасаҡ, әммә үҙеңдән ситкә ҙур юлға сығып, эске торошоңда ла сәйәхәт итә башлайһың. Тышҡы донъяла нимәләр өйрәшергә ынтылыу - үҙеңдең кем икәнлегеңде аңлау мөмкинлеге ул. Ҡыҫҡаһы, кем генә булһағыҙ ҙа, һеҙҙең алға барыу мөмкинлегегеҙ бар, сөнки һеҙ ағас түгел, ә кеше!

### Һылтауҙар һәм аҡланыуҙар

Әгәр ниндәйҙер тормошҡа ашмаған хыялығыҙ бар икән, тәү сиратта, уйҙарығыҙҙы анализлап, улар араһынан аҡланыуҙарҙы табырға тырышығыҙ. Беҙ, ғәҙәттә, үҙ-үҙебеҙҙе алдайбыҙ. Бик йыш "был эш минең өсөн мөмкин түгел" тибеҙ, ә "мин уны эшләгем килмәй, сөнки уны эшләү бик мәшәҡәтле" тиһәк, дөрөҫөрәк булыр. Ындай кешеләрҙе аңларға мөмкин. Үҙҙәренең ҡарары, һәм был яҡшы ла, насар ҙа түгел. Уларҙың үҙ-үҙҙәрен һайлау булмауына инандырырға тырышыуы насар. Ҡайһы берҙә кеше үҙен инфаркт торошона еткергәнсе икенсе эшкә күсеү мөмкинлеге юҡлығына зарлана, ә инде инфаркт кисергәс, шунда уҡ мөмкинлек тә таба. Ҡыҫҡаһы, йә һин музыкаға үҙең заказ бирәһең, йә быны һинең өсөн башҡалар эшләйәсәк. Тормошоңдо яратҡан эшеңә бағышлау өсөн табиптарҙың ярты йыл ғына ғүмерең ҡалған тип әйтеүен көтөү кәрәкме?

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 6 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Бег". Худ. фильм (12+).
10.00 Новости.
10.15 "Полосатый рейс". Худ. фильм.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Королева бензоколонки". Комедия.
13.45 "Весна на Заречной улице". Мелодрама.
15.30 "Эхо любви". Концерт к 85-летию Роберта Рождественского в Государственном Кремлевском Дворце.
17.30 "Я могу!" Шоу уникальных способностей.
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Время".
21.20 "Троцкий". 1-я и 2-я серии. Исторический сериал (16+).
23.15 "Подлинная история русской революции" (16+).
01.20 "Что скрывает ложь". Худ. фильм (16+).
03.40 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.45 "Генеральская сноха". Худ. фильм (12+).
09.40 "Любовная сеть". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Любовная сеть". Продолжение сериала (12+).
17.50 "Любовь и голуби". Комедия (12+).
20.00 "Вести".
20.20 "Демон революции". Фильм 2-й. Исторический сериал (12+).
22.35 "Великая русская революция". Худ. фильм (12+).
00.40 "Белая гвардия". Сериал (16+).
02.45 "Песочный дождь". Худ. фильм (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро, республика!" (12+).**
**07.45, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Приключения Аленушки и Еремы" (6+).**
**09.30, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**10.00 "12 стульев". Сериал (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Чак-чак". Худ. фильм (12+).**
**13.30, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**13.45 Фильм-концерт "Дарман".**
**14.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.00 "Башкирская открытая лига. Кубок чемпионов (12+).**
**16.30 "Красная кнопка" (16+).**
**17.15 "Бизнес-проба" (12+).**
**17.30 "Юлдаш-йыры-2017". Гала-концерт (12+).**
**19.00 "Юлдаш-йыры-2017". Гала-концерт. Продолжение (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**24.00 "Земля Санникова". Худ. фильм.**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Г.Шафиков. "Операция" (12+).**

## 7 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
10.00 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 03.45 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Троцкий". 3-я и 4-я серии. Исторический сериал (16+).
23.35 "Подлинная история русской революции" (16+).
01.35, 03.05 "Он, я и его друзья". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Демон революции". Фильм 3-й (12+).
22.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.20 "Белая гвардия". Историко-драматический сериал (16+).
03.20 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "12 стульев". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.00 "Вижу сны..." (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Свой среди чужих, чужой среди своих". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 8 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 03.30 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Троцкий". 5-я и 6-я серии. Исторический сериал (16+).
23.35 "Подлинная история русской революции" (16+).
01.35, 03.05 "Помеченный смертью". Боевик (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Запретная любовь". 1-4-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Белая гвардия". Историко-драматический сериал (16+).
03.00 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "12 стульев". Сериал (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.00 "Вперед и только вперед!" (12+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Автограф" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Сказ про то, как царь Петр арапа женил". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 9 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 03.50 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Троцкий". 7-я и 8-я, заключительная, серии. Исторический сериал (16+).
23.35 "Подлинная история русской революции". Док. фильм (16+).
01.35, 03.05 "Вечное сияние чистого разума". Мелодрама (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Запретная любовь". 5-8-я серии. (16+).
00.55 "Белая гвардия". Сериал (16+).
03.05 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "12 стульев". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.300, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.15 "Учим башкирский язык".**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "На пути в Пхенчхан" (12+).**
**17.45 "Современник" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Монтана". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 10 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.10 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.20 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Угадай мелодию".
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Лукино Висконти". Док. фильм (16+).
01.30 "Побег из Вегаса". Комедия (16+).
03.30 "Делайте ваши ставки!" Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Смешанные чувства". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Запретная любовь". 9-12-я, заключительная, серии (12+).
00.55 "Тили-тили тесто". 4 серии. . Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "12 стульев". Сериал (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Ф.Буляков. "Море мечты" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Современник" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**24.00 "Области тьмы". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.15 М.Гафури. "Черноликие" (12+).**

## 11 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Мама Люба". Сериал (12+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Летучий отряд".
11.00 "Жизнь Льва Троцкого. Враг номер один" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.20, 15.20 "Статский советник". Детектив (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.15 "Кто хочет стать миллионером?"
17.50 Футбол. Сборная России - сборная Аргентины. Товарищеский матч. Прямой эфир.
20.00, 21.15 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.05 "Прожекторперисхилтон" (16+).
23.40 "Короли фанеры" (16+).
00.30 "Большие глаза". Драма (16+).
02.25 "На обочине". Худ. фильм (16+).
04.45 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.40 "Срочно в номер!" Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Россия. Местное время" (12+).
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!"
14.00 "Вести".
14.20 "Третья попытка". Худ. фильм (12+).
16.15 "Разбитые сердца". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Ночь после выпуска". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.55 "Каминный гость". Мелодрама (12+).
02.50 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Детективный сериал.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Тарзан" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15"Это мы!" (6+).**
**11.45 "Медовый детектив".**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**17.00 М.Буракаева. "Судьба, выбранная мной" (12+).**
**19.00 "Звездный Байыҡ" (12+).**
**19.30 "Колесо времени" (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 02.15 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**24.00 "Любой ценой". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Т.Гарипова. "Гилмияза" (12+).**

## 12 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "Мама Люба". Сериал (12+).
06.00 Новости.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.00 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым "(12+).
10.00 Новости.
10.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым".
11.00 "Моя мама готовит лучше!"
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.15 "Белые росы". Лирическая комедия (12+).
15.00 "День сотрудника органов внутренних дел". Праздничный концерт.
17.30 "Я могу!" Шоу уникальных способностей.
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Куб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Второй полуфинал (16+).
00.40 "Дракула". Боевик (16+).
02.20 "Деловая девушка". Худ. фильм (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.50 "Срочно в номер!" Сериал (12+).
06.45, 03.20 "Сам себе режиссер".
07.35, 02.55 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
13.05 "Сломанные судьбы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
16.40 "Стена". Игровое шоу (12+).
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий.
01.00 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Сериал.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Дядя Федор, Пес и Кот" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Р.Шарт. "Мою жену зовут Морис" (12+).**
**19.15 "Ломая барьеры" (6+).**
**20.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.00 15 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Альфа Дог". Худ. фильм (16+).**
**По окончании Новости (на башк. яз.). (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Хөбәйбә Әҙелғужина, Зилә Мөхәмәтова, Мәрйәм Ишкилдина, **Федоровка районы** Бала Сытырман ауылынан Рәйфә Вәлиева, **Ғафури районы** Ҡормантау ауылынан Маһира Муллағәлиева, **Ауырғазы районы** Моразым ауылынан Фәһимә Дилмөхәмәтова, **Белорет районы** Инйәр ауылынан Фаягөл Сәйғәфәрова, Сосновка ауылынан Ғилиә Фәтҡуллина, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Миңлебай Дәүләтбаев, **Өфө ҡалаһынан** Бибисара Азаматова, Шәүрә Әбүбәкерова, **Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылынан Ғәбиҙә Зөлҡәрнәева, **Учалы ҡалаһынан** Роза Хажина, **Архангел районы** Абзан ауылынан Тәслимә Рәхимова, Архангел ауылынан Рәғиҙә Ғиззәтуллина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Беҙ уҡыусыларыбыҙҙы тормошто ратыусы, ыңғай уйҙар ғына уйлап йәшәүсе итеп беләбеҙ, артабан да ошондай юғары рухта, кәйефтә ҡалығыҙ. Һеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, аҡ бәхеттәр теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+

**5 ноябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

**7 ноябрь "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+

**8 ноябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+

**9 ноябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

**10 ноябрь Фидан Ғафаровтың** юбилей кисәһе 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 ноябрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+

**10 ноябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Бәләкәй зал**

**4, 5 ноябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова). Башлана 16.00 0+

**Ҙур зал**

**4 ноябрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+

**5 ноябрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков) 0+

**6 ноябрь "Большой секрет"** (А. Рахманкулова) 0+ Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия 12+

**9 ноябрь** Абонемент "Сквозь призму времени" "Поющая душа художника" филармония солистары 6+

**10 ноябрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+

**41-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Урталыҡ. Ғүмәр. Торатау. Кама. Ыласын. Волейбол. Таяҡ. Ата. Умарта. Тромб. Андыҙ. Ҡурғаш. Йөрәктау. Нардуған. Арпа. Лама. Рота. Тары. Алма. Уба.

**Вертикаль буйынса:** Вертолет. Кәлимосҡан. Бөйөр. Ташбаш. Дарман. Акр. Туғарсалған. Алатау. Торна. Тана. Ҡарауылтау. Ҡуҡрауыҡ. Африка. Соҡор. Нуҡта. Шура.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ноябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (17) дүшәмбе | 7:01 | 8:31 | 13:30 | 15:57 | 17:27 | 18:57 |
| 7 (18) шишәмбе | 7:03 | 8:33 | 13:30 | 15:55 | 17:25 | 18:55 |
| 8 (19) шаршамбы | 7:05 | 8:35 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 9 (20) кесе йома | 7:07 | 8:37 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 10 (21) йома | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 15:50 | 17:20 | 18:50 |
| 11 (22) шәмбе | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 12 (23) йәкшәмбе | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

## ИХЛАСЛЫҠ

**Ислам динендә һәр нәмә үҙенә генә хас бер ниәт менән эшләнә. Хатта ашау-эсеү тәртибе өсөн дә ниәтенә ҡарап сауабы була.**

"Нимә генә эшләһәгеҙ ҙә, Аллаһ ризалығы өсөн тип, ихласлыҡ менән эшләгеҙ. Ихласлығы булмаған эштәрҙе Аллаһ ҡабул итмәй", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

Бәйғәмбәребеҙ тағы ла әйткән: "Аллаһы Тәғәлә - изге, Ул изге кешеләрҙе, күркәм холоҡлоларҙы һөйә, әшәке әхлаҡты һөймәй". Киң күңелле, күркәм булырға өндәй. "Бер-берегеҙ менән сәләм биреп күрешегеҙ, үҙ-ара мөхәббәтегеҙ һәм дуҫлығығыҙ артыр", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. Бер-берегеҙҙең хәл-әхүәлен белеп тороғоҙ. Ислам динендә сәләм - бөйөк ғәмәл. "Арағыҙҙа "сәләм" һүҙен таратығыҙ, өҫтәлегеҙ асыҡ булһын, бөтәгеҙ ҙә Аллаһы Тәғәлә хозурында ҡәрҙәш булығыҙ!" - тигән Бәйғәмбәр.

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ.

# ҠЫРҠ ПЛЮС



**Мәскәүҙә "Moscow Fashion Week" Юғары мода аҙналығы Андрей Пономаревтың "Ponomarev by NN" кейемдәр коллекцияһын күрһәтеү менән тамамланды. Ҙур коллекцияға киске күлдәктәр, костюмдар, спорт образдары инде. Рәсәйҙә тәүгә подиумға беҙ күреп өйрәнгән бәләкәй үлсәмле моделдәр менән бер рәттән, кейем үлсәме 40-сы размерҙан ашыу булған plus size моделе сыҡты.**

Сарала Башҡортостандан берҙән-бер фэшн модель - халыҡ-ара матурлыҡ конкурстары, телепроекттар еңеүсеһе, "Stikhia" ҡыҙҙар һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән проект етәксеһе Эльвира Ишморатова ла ҡатнашты. "Залда 1700-ҙән ашыу кеше булды, урындар бөтәһенә лә етмәне. Иң киктес һәм күҙҙең яуын алып торорҙай эштәр үҙенең стиле, матурлығы менән хайран ҡалдырҙы, - тип һөйләне Эльвира "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһенә. - Коллекцияны йылы ҡабул иттеләр, уны күрһәткән саҡта алҡыштар туктаманы. Коллекция менән таныштырғандан һуң күп кенә тамашасылар минең менән фотоға төшөргә теләне, образым, оҙон сәсем менән һоҡланды". Эльвира әйтеүенсә, коллекция менән таныштырыуға тиклем бер нисә этаптан торған кастинг булған, унда башҡорт ҡыҙын Анна Мелешко сайлаған.

"Plus size үлсәмле ҡыҙҙар өсөн ошондай иҫ киткес кейемдәр тегеүҙәре бик шәп. Коллекциялар менән таныштырыуҙа, телевидениеға һәм фотоға төшөүҙә тәжрибәм ҙур, күп кенә дизайнерҙар менән эшләнем, әммә тәүгә бөтә эштәр ҙә таң ҡалдырҙы, бик зауыҡлы булды", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Эльвира Ишморатова. "Андрей Пономаревты уның коллекцияһы менән таныштырыуҙы ойоштороуҙы вәғәҙәләп, баш ҡалабыҙға саҡырҙым. Өфө яңы модалы баш ҡала булырға тейеш", - тигән ышаныста Эльвира. Андрей Пономарев - 2013, 2014, 2015, 2016 йылдарҙа иң яҡшы дизайнер тип табылған, Миланда мода аҙналығы дебютанты, "Йыл кешеһе-2016", шоу-бизнес һәм телевидение йондоҙҙарын кейендерә.

# НЕФТЕКАМА ФИЛАРМОНИЯҺЫНА - 20!



**Башҡортостанда Нефтекама дәүләт филармонияһы 20 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Байрам сараларында республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ҡатнашты, тип хәбәр иттеләр ведомстводың матбуғат хеҙмәтенән. Был кис филармония коллективы "Йөрәгемдең балҡышы" исемле яңы музыкаль программа әҙерләгәйне. Программала опера ариялары һәм эстрада йырҙары, бейеү номерҙары, цирк шоуы булды.**

Нефтекама дәүләт филармонияһы - Башҡортостандың филармония коллективтары араһында иң йәше, республиканың төньяҡ-көнбайышында берҙән-бер профессиональ мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеһы. Филармония төбәктә әүҙем концерт эшмәкәрлеге алып бара, күрше төбәктәрҙә күпләп башҡорт, татар, мари халҡы йәшәгән урындарға гастролдәргә сыға. 20 йыл эсендә коллектив бихисап концерт программаһы әҙерләгән. Бында алты ижади төркөм: башҡорт (етәксеһе Раян Алтыншин), татар (етәксеһе Рифҡәт Ғәбделйәнов), мари (етәксеһе Раисия Иҫәнбаева), цирк бригадалары (етәксеһе Нурания Хәлитова), "Түңгәүер" бейеү ансамбле (етәксеһе Гөлнара Сәфәрова), музыкаль лекторий (етәксеһе Рита Ҡарасурина) эшләй. Филармонияның коллективы "Дуҫлыҡ моно", "Урал моно", "Самоцветы Прикамья", "Чолман йук" кеүек республика концерттарында, төбәк-ара фестивалдәрҙә һәм конкурстарҙа, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге сараларҙа, милли һабантуй байрамдарында даими ҡатнаша.

# "ЙӨРӘК ҺҮҘЕ" ЕҢЕҮСЕҺЕН КӨТӘ

**Башҡортостандың баш ҡалаһында "Йөрәк һүҙе" шиғри проектының ярымфиналсылары билдәләнде. Республиканың танылған шағирҙары, яҙыусылары, артистары, билдәле йәмәғәт эшмәкәрҙәренән торған 56 дуэт башҡорт поэзияһы классиктарының шиғырҙарын һөйләне.**

"Ҡурай" телеканалынан проектты ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, тауыш биреүҙә бөтәһе 8424 кеше ҡатнашҡан. 12 пар иң күп тауыш йыйған. Улар - тәрбиәсе Дилара Әйүпова һәм унын ҡыҙы Зөлхизә, яҙыусы, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев һәм филолог Алина Ғәлиева, шағирә Гөлнара Хәлфетдинова һәм ҡыҙы Гөлнәзирә Буранҡаева, шағирә Зөлфиә Ханнанова һәм ҡыҙы Гүзәл Әлибаева, яҙыусы, драматург, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин һәм улы Йәдкәр, шағирә, йәмәғәт эшмәкәре Гөлфиә Юнысова һәм һеңлеһе Зөйтүнә Даянова, шағирә, журналист Лариса Абдуллина һәм улы Хасбулат, артистар Миләүшә һәм Ләйсән Шәриповалар, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙары Илдар Ғүмәров һәм Светлана Хәкимова, Гөлназ һәм Руслан Хайсаровтар, шағирә, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Йомабикә Ильясова һәм ҡыҙы Таңсулпан Аҡбашева, Салауат драма театры актерҙары Винира Хәсәнова һәм Ринат Ибәтуллин.

Ярымфинал 28 ноябрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында уҙа. Шиғри бәйге барышында өс дуэт-финалсы билдәләнә, уларҙың береһе еңеүсе исеменә лайыҡ буласаҡ.

# ЛАУРЕАТ БУЛДЫЛАР

**Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Ш. Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаттарының исеме билдәле булды.**

2015, 2016 йылдарҙағы премия лауреаттары тип "Өй түбәмдә күгәрсендәр" китабы өсөн Алмас Шаммасов, Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Хыялға ҡаршы" спектаклен юғары художество әҫәре кимәленә күтәргән һәм башҡорт театр сәнғәтен пропагандалаған өсөн Илсур Ҡаҙаҡбаев, Урал Әминев, Ринат Баймырҙин, Артур Кәбиров, Фәнис Рәхмәтов составындағы ижади коллектив, хор сәнғәте өлкәһендәге уңыштары өсөн Алһыу Хәсбиуллина лайыҡ тип табылды. Быйыл комиссия ҡарамағына бөтәһе 15 эш тапшырылғайны, уларҙың 10-ы - сәнғәт, 4-һе - әҙәбиәт, 1-һе архитектура өлкәһенән. Премия Башҡортостан Республикаһы үҫешенә ҙур өлөш индергән йәш яҙыусыларға, рәссамдарға, артистарға, музыканттарға, архитекторҙарға, режиссерҙарға ике йылға бер тапшырыла. Премияның күләме - 150 мең һум. 22 йыл эсендә был лайыҡлы баһаға 47 шәхси автор һәм 12 коллектив лайыҡ булған. Төрлө йылдарҙың премия лауреаттары араһында опера йырсыһы Зөһрә Байбурина, кинорежиссер Булат Йосопов, композитор Урал Иҙелбаев, ҡурайсы Роберт Юлдашев, йырсы Земфира Рамазанова бар.

# ҠУРАЙСЫ ҠЫҘ



**"Ҡурай баттл" бәйгеһендә билдәле ҡурайсыларҙы аптта ҡалдырып, ҡурайсы ҡыҙ еңеү яуланы. Ул һирәк яңғыраған халыҡ көйө "Ҡыркты кәкүк"те башҡарҙы.**

Ҡурайсы ҡыҙ Земфира Рәшитоваға 23 йәш, ул "Тамыр" телеканалында "Тау-тау хәбәр" тапшырыуы мөхәррире булып эшләй, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡый, БР Халыҡтар дуҫлығы йорто эргәһендәге Йәштәр советы рәйесе. Буш ваҡыттарында балаларға ҡурай серҙәрен өйрәтә. Ир-егеттәр һөнәре тип иҫәпләнгән ҡурайсы һөнәрен һайлауына һис үкенмәй. Ул профессиональ ҡурайсы булырға ниәтләнә. "Бының менән ҡурайсы ҡатын-ҡыҙҙарға юл асырға теләйем", - ти Земфира.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТҮҘЕМЛЕЛӘРҘЕҢ...

## асыуынан ҡурҡ

Һәр бала бер аҙ ғына даһи, һәр даһи бер аҙ ғына бала.

**(Артур Шопенгауэр).**

Геройҙар ҡурҡыныс минуттарҙа бик кәрәк, ҡалған ваҡытта улар - ҡурҡыныс.

**(Габриэль Лауб).**

Түҙемле кешенең асыуынан ҡурҡ.

**(Джон Драйден).**

Бик нык асыуың килһә, унға тиклем һана ла, шунан ғына һүҙеңде әйт; әгәр ҙә бик тә нык асыулы икәнһең, йөҙгә тиклем һана һәм... бер һүҙ ҙә әйтмә.

**(Марк Твен).**

Йөрәк менән баш көрәшкәндә... ашҡаҙан еңеп сыға.

**(Станислав Лец).**

Һәр кем үҙен ниндәй дәрәжәлә бәхетһеҙ тип иҫәпләй, шул тиклем дәрәжәлә бәхетһеҙ була.

**(Сенека).**

Әгәр ҙә кешенең башҡа маҡтанырлыҡ урыны булмаһа, ул үҙенең бәхетһеҙлеге менән маҡтана башлай.

**(Синклер Льюис).**

Хужа кеше ғүмер буйы йәшәп тә күрмәгәнде, ҡунаҡ кеше уның өйөндә өс сәғәт булып та ниндәйҙер етешһеҙлекте шәйләүе бик мөмкин.

**(Юрий Крижаныч).**

Иртә йәштә хаталар яһағандарға йәшәүе еңелерәк. Улар иртәрәк йәшәргә өйрәнә.

**(Уинстон Черчилль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт кеше шундай төш күрә: йәнәһе лә, ул ҡомдан атлай, ә уның эргәһендә - Аллаһ үҙе. Күк йөҙөндә бер-бер артлы был кешенең тормош күренештәре хасил була, һәр береһендә ул кешенең ҡомдан үткән эҙе күренә, йәнәшендә тағы бер рәт эҙҙәр килә, ти. Уныһы - Алланыҡы.**

**Ғүмеренең һуңғы һүрәтен ҡарағас, кеше артына боролоп, ҡомдағы эҙҙәргә ҡарай. Ни өсөндөр, ошо ғүмеренең картлыҡтағы иң ауыр мәлендә ҡомда тик бер рәт кенә эҙҙәр ҡалған була. Кеше быны аңлай алмай һәм Алланан һорай:**

**- Ғүмеремдең ҡартлыҡ мәлендә ҡом буйлап бер генә сылбыр эҙҙәр теҙелгән. Иң ауыр сағымда Һин ни өсөн мине яңғыҙ ҡалдырҙың?**

**Аллаһ шулай тип яуап биргән:**

**- Ғүмереңдең һуңғы ҡартлыҡ мәлендә ысынлап та ҡом буйлап тик бер генә сылбыр эҙҙәр һуҙылғандыр. Тик һин бер үҙең ҡалмағайның, ундай ваҡыттарҙа мин һине ҡулдарымда күтәреп барҙым..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2246/11